✓ ***Почтальондар иғтибарына! Матбуғат баҫмаларының гәзит уҡыусыға бары тик почта хеҙмәткәрҙәре фиҙаҡәрлеге менән барып етеүен беләбеҙ, уларҙың хеҙмәтен юғары баһалайбыҙ. 2014 йылдың беренсе яртыһына гәзитебеҙгә яҙылыу барған әлеге мәлдә почтальондарға шундай тәҡдим: кем дә кем 50-80 дана "Киске Өфө"гә яҙҙыра, улар беҙҙең матур бүләктәргә (кәрәҙле телефон, микротулҡынлы мейес, электр ит турағысы, блендер һ. б.) лайыҡ буласаҡ. Бүләктәрҙе алыу өсөн почтальондың үҙе яҙҙырған квитанцияларҙың күсермәләрен редакцияға ебәреүе шарт.***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

16 - 22 НОЯБРЬ (ҠЫРПАҒАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№46 (568)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Башҡорт юморының...**

киләсәге төҫмөрләнә һымаҡ



5,16

**Тирә-яғыбыҙҙағы ваҡиғалар...**

беҙҙең сағылышыбыҙ ғына



6

**Мин башҡорт телен күтәрәм,**

башҡорт теле мине күтәрә...



8-9

**Шул яҡтарға ҡарап бер йырланым...**

Уйҙарымды алыҫҡа ла ебәреп



11

14 **ТВ-программа**


*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Милләт-ара мөнәсәбәттәр буйынса Советтың Өфөлә булып үткән ултырышында киң мәғлүмәт сараларына ҡарата етди тәнҡит һүҙҙәре яңғыраны. Был йәһәттән Башҡортостан киң мәғлүмәт саралары эшмәкәрлеген нисек баһалар инегеҙ?

***Әлфиә ХӘКИМОВА, "Әбйәлил" район гәзите баш мөхәррире:*** Милләт-ара мөнәсәбәттәр ни тиклем ҡатмарлы булһа, шул тиклем үк нескә һәм сетерекле лә. Уйлап еткерелмәгән бер һүҙҙән мең бәләгә тарыуың ихтимал. Ә инде Үҙәк телевидение трибунаһынан тороп, депутат һынлы депутаттың - ЛДПР лидеры Жириновскийҙың, билдәле бер милләт вәкилдәренә ҡарата асыҡтан-асыҡ нәфрәтен белдереүе, ғөмүмән, башҡа һыймаҫлыҡ эш булды. Ярай әле, Рәсәй Президентының ҡолағына инде был сығыш һәм Жириновскийға арыу ғына һабаҡ бирелде.

Ил законларын сығарыусы юғары дәүләт органдары трибунаһында тормаһаҡ та, журналист һөнәре лә киң публика менән бәйле: һәр әйткән һүҙебеҙ минуты-сәғәтендә халыҡҡа барып етеп тора. Шуға күрә беҙ башҡа халыҡтарға ҡарата үҙебеҙ генә тотанаҡлы, сабыр, һиҙгер булырға түгел, ә ошо уҡ сифаттарҙы уҡыусыларыбыҙҙа ла тәрбиәләргә бурыслыбыҙ, сөнки беҙҙең гәзитте башҡорттар ғына түгел, ә районыбыҙҙа йәшәүсе башҡа бик күп милләт халыҡтары ла алдырып уҡый бит. Төрлө милләт халыҡтары араһындағы дуҫлыҡ ептәрен нығытыуға булышлыҡ итеүсе ҡыҙыҡлы кешеләр - гәзитебеҙ биттәренең йыш ҡунаҡтары. Мәҫәлән, Магнитогорск ҡалаһында йәшәүсе рус ҡатыны - рәссам һәм этнограф Галина Гончарова хаҡында әбйәлилдәр бик яҡшы белә: ул күптәнән бирле беҙҙең төбәк ерһыу атамаларын, башҡорт халҡының тарихын, мәҙәниәтен, көнкүрешен өйрәнә, уны хатта башҡорттарҙың ҡайһы берҙәренә ҡарағанда ла яҡшыраҡ белә. Г.Гончарованың башҡорттар хаҡында китаптары, шиғырҙары, картиналары киң билдәле беҙҙә. Ҡыҫҡаһы, халыҡтар дуҫлығын нығытыусы ана шундай геройҙар хаҡында күберәк яҙһаҡ, кешенең милләтенә баҫым яһап түгел, ә кешелеклегенә, башҡарған изге эштәренә ҡарап баһа бирһәк кенә халыҡтарҙың һыйышып, тыныс йәшәүенә үҙ өлөшөбөҙҙө индерә аласаҡбыҙ.

***Сәйфулла ӘМИРОВ, Мәләүез районының "Көнгәк"гәзите баш мөхәррире:*** Һәр халыҡ, һәр милләт кешеләре араһында яҡшыһы ла, насары ла булған кеүек, илдәге бөтөн матбуғат сараларын да бер рәткә ҡуйыу дөрөҫ булмаҫтыр, моғайын. Үҙәк телевидение каналдарындағы яңылыҡтарҙы ҡараһаң, әйтерһең дә, илдә һуғыш барған һымаҡ: бында завод шартлаған, тегендә поезд рельсынан сыҡҡан, автоһәләкәттәрҙә, юл хәрәкәте ваҡиғаларында һәләк булыусылар һаны хәҙер тиҫтәләрсә мең кеше иҫәпләнә. Үҙәк матбуғатты фәҡәт бына ошондай "ҡыҙҙырылған" ваҡиғалар ғына ҡыҙыҡһындыра. Милләт-ара мөнәсәбәттәр темаһы ла ниндәй ҙә булһа ыҙғыш, бәхәсле хәл, низағ фәлән килеп сыҡһа ғына иҫкә алына. Һүҙ азатлығы тигән төшөнсәгә беҙҙә аныҡ ҡына ҡылыҡһырлама бирелмәй, мәҫәлән, теге йәки был насар хәл-ваҡиғала ҡатнашыусының милләте күрһәтелһә, журналист закон алдында яуап бирергә тейеш. Шуға күрә күп кенә матбуғат саралары был теманан ситтә торорға тырыша, сөнки, кем әйтмешләй, бәләһенән баш-аяҡ.

Ғәҙәттә, милләт-ара мәсьәләләрҙе күтәргән кеше, белер-белмәҫ көйөнә, бөтә ғәйепте дингә килтереп тә бәйләй: бәндә мосолман икән, тимәк, ул шикле әҙәм йә террорсы тип ҡараусылар бар. Быға ниндәйҙер кимәлдә нигеҙ биреүсе сәбәп тә бар кеүек, сөнки сит илдәрҙә уҡыған ҡайһы бер диндәштәребеҙ беҙҙең тарафтарға ят булған идеология алып ҡайта һәм халыҡ араһында, тик ул ғына хаҡлы, тигән ҡарашты тырышыптырмашып бойомға ашырырға маташа башлай. Йәнәһе лә, кем беҙҙең менән түгел, шул беҙгә ҡаршы, тигән һөрһөп бөткән сәйәсәткә өҫтөнлөк бирә. Әгәр ҙә ил күләмендә барлыҡ халыҡтарҙы берләштерерҙәй берҙәм дәүләт сәйәсәте алып барылһа, бер ниндәй ҙә милләт-ара ыҙғыштар ҙа, дини экстремизм да булмаҫ ине, тип уйлайым.

Республикабыҙ мәғлүмәт сараларына килгәндә, ниндәйҙер факттарҙың күрәләтә боҙоп, ҡабартылып күрһәтелгәнен, асыҡтан-асыҡ милләт-ара ыҙғыш тыуҙырырҙай провокацион материалдарҙың баҫылып сыҡҡанын һәм шул арҡала ығы-зығы ҡупҡанын, бәхеткә күрә, хәтерләмәйем.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*ЗЫЯЛЫЛАР - "КИСКЕ ӨФӨ" ТУРАҺЫНДА*

# ЙӨКМӘТКЕ ҺӘМ...

## маҡсат бөтөнлөгө унда

**"Киске Өфө" кеүек халҡыбыҙ рухын күтәрерҙәй бай йөкмәткеле баҫмабыҙ йәшәп килеүенә, уны баш ҡалабыҙҙа ғына түгел, республикабыҙ ауылдарында ла яратып уҡыуҙарына ҡыуанам.**

Һуңғы йылдарҙа гәзит-журналдар үҙ уҡыусыларын юғалтҡан мәлдә "Киске Өфө"нөң тиражы тотороҡло һаҡланып килеүе, әлбиттә, уҡыусыларҙың ошо баҫмаға ҡарата эске ихтяж кисереүе, ҡыҙыҡһыныуы һәм уға ышанысы хаҡында һөйләй. Айырыуса уның туған телебеҙҙе яҡлау, уның гәүһәрҙәрен байытыу, тарихыбыҙҙы, тамырҙарыбыҙҙы барлау буйынса төпсөрлөгө хуплауға лайыҡ, тип уйлайым. Дөрөҫөн генә әйткәндә, гәзиттең һәр бите, һәр рубрикаһы билдәле бер маҡсатҡа йүнәлтелгән һәм күп осраҡта был маҡсаттың тоҫҡалған сәпкә килеп тейеүе "Киске Өфө" гәзитенең уҡыусы йөрәгенә юл яра белеү маһирлығы, кеше күңеленә уй һалыу, тема күтәреү оҫталығы тураһында һөйләй. Редакция коллективының эшмәкәрлеге тап ошо сифаты менән ҡиммәт тә, минеңсә. Күп баҫмалар бит бөгөн бына ошондай йөкмәтке һәм маҡсат бөтөнлөгөнән мәхрүм.

Әҙәби биткә ҡағылышлы фекерем шул: гәзиттең йәштәргә, шулай уҡ ошоға тиклем билдәһеҙ булған авторҙарға һүҙ биреп, әллә күпме яңы исемдәр асыуы ла маҡтауға лайыҡ. Бәғзе бер редакцияларҙа хатта олпат яҙыусыларҙың ҡулъяҙмалары менән дә һаҡһыҙ ҡыланып, уларға ваҡытында гәзит биттәренән урын бирелмәүен иҫәпкә алғанда, талант эйәләре өсөн "Киске Өфө" редакцияһы ишектәре һәр ваҡыт шар асыҡ. Үҙем журналистикала оҙаҡ йылдар көс түккән ижадсы булараҡ, яҡшы беләм: иш янына - ҡуш, тигәндәй, авторҙар менән ана шулай эшләгәндә генә баҫманың йөкмәткеһе тос була бит ул. Тик бер теләгем дә бар: "Киске Өфө" үҙе туған телебеҙ камиллығы, матурлығы, һүҙ байлығы һағында, боронғо ата-бабаларыбыҙ ҡулланған һүҙ-ынйылар өсөн ҡалҡандай торған баҫмабыҙ булараҡ, ҡәләм тибрәтеүсе йәштәр теленә ҡарата ла ифрат ныҡ талапсанлыҡ күрһәтһен ине.


**Әнисә ТАҺИРОВА,**
**шағирә.**




**✓ Өфөләге Конгресс-Холл эргәһендә төҙөләсәк ҡунаҡханаға көнбайыш телдәренә хас атама биреү төптө ҙур хата (Hilton, Holiday, имеш). Былай ҙа Өфө урамдарында туҙға яҙмаған атамалы төрлө магазиндар быуа быуырлыҡ.**



УЙЛЫҒА - УЙ

# АТАМАЛАР...

## үҙебеҙсә булһын!

**"Киске Өфө"ләге уйлыға уй һалырлыҡ эстәлекле фекерҙәр беҙҙең өсөн йәшәү стимулы булып тора, милләтебеҙ үҫешендә етди әһәмиәткә эйә. Ул фекерҙәрҙең күптәренә эйәреп фекерләшергә булыр ине. Был юлы шуларҙың береһенә генә туҡталмаҡсыбыҙ.**

Гәзиттең 32-се һанында Нияз Мәжитовтың "Башҡорт ҡалаһы Каталон атласында" тигән мәҡәләһендә Александр Григорьевич Юрченко тигән Санкт-Петербург ғалимы, Урта быуат карталары буйынса белгестең башҡорт ҡалаһына бәйле мәғлүмәттәр туплаған китап яҙыр өсөн 750 мең һум аҡса һорауы тураһында яҙылғайны. Был осраҡта кемгә мөрәжәғәт итергә тейеш ине? Әлбиттә, республика Хөкүмәтенә. Әммә академик Нияз Мәжитовтың был мөһим үтенесен БР Хөкүмәте ҡәнәғәтләндермәгәнен гәзиттән укып белдек.

Беҙҙең тәҡдим: Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты иҫәп асып, халыҡтан аҡса йыйыу эшен йәйелдерергә кәрәк. Кемдәр үҙебеҙҙең тарихыбыҙға битараф түгел, үҙен милләтебеҙҙең ысын патриоты тип иҫәпләй, был изге һәм кисектергеһеҙ мөһим эшкә ҡушылыр ине, тип уйлайбыҙ.

Тағы бер тәҡдим. ШОС һәм БРИКС саммитына әҙерлек эштәре барғанда, был осрашыуға көнсығыш илдәренән күренекле дәүләт эшмәкәрҙәре килеүен иҫәпкә алып, Өфөләге Конгресс-Холл эргәһендә төҙөләсәк ҡунаҡханаға беҙҙең, гөмүмән, рәсәйлеләрҙең ҡолағына ят булған көнбайыш телдәренә хас атамалар биреү төптө ҙур хата, тип иҫәпләйбеҙ (Hilton, Holiday, имеш).

Былай ҙа Өфө урамдарында туҙға яҙмаған атамалы төрлө магазиндар, ААЙ-ҙар һәм ЯАЙ-ҙар быуа быуырлыҡ таһа. Конгресс-Холл тигәндә лә үҙебеҙсәрәк атап булыр ине. Ошондай мәғәнәһеҙлектәргә ҡаршы көрәшеп булмаймы ни ул? Күпме данлы тауҙарыбыҙ, йылғаларыбыҙ, ауыҙ-тел ижады гәүһәрҙәребеҙ бар. Баш ҡалабыҙҙа төҙөләсәк ҡунаҡханаларға исемде башҡорт халҡы, аҫаба халыҡ, үҙе һайлаһын. Ер шарының әһәмиәтле халыҡ-ара ойошмаһы етәкселәре сәнғәтебеҙҙең мәшһүрлегенә генә түгел, зиһенебеҙҙең камиллығына, үҙаңыбыҙҙың бөйөклөгөнә, ысынлығына һоҡланып ҡараһын да милли мәҙәниәтебеҙҙе, ошо мәҙәниәтебеҙҙең йөҙөк ҡашы булған телебеҙҙе һаҡларлыҡ, яҡларлыҡ эшлекле ҡарарҙар ҡабул итһен ине.

Ҡунаҡхана исемдәрен һайлау йәһәтенән шундай тәҡдим бар. Уларҙы, мәҫәлән, түбәндәгесә атарға мөмкин: Башҡорт-ҡала, Имәнҡала, Уралтау, Ҡариҙел, Әй, Бөркөт, Ыласын, Шонҡар, Ҡыйғыр, Етегән, Йондоҙ, Ҡош юлы, Арҡысаҡ, Йәйгор, Ҡуңыр буға, Туғанлыҡ, Таған, Ҡәлғә, Зиннәтле, Хайран, Һынташ, Ҡор, Хөррият, Ожмах, Арғымаҡ, Толпар, Алпамыша, Батыр, Заятүләк, Һыуһылыу, Дан, Абруй, Аҡһаҡал, Алғыр, Алҡыш һ.б.

**Өфөнөң Дим районы башҡорт теле уҡытыусылары**
**М. Абдуллина, И.Атнабаева, Ф.Ниғмәтова, А.Шәмсетдинова, Г.Кириллова, И.Урмантаев.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Милләт-ара мөнәсәбәттәр буйынса Советтың Өфөлә булып үткән ултырышында киң мәғлүмәт сараларына ҡарата етди тәнҡит һүҙҙәре яңғыраны. Был йәһәттән Башҡортостан киң мәғлүмәт саралары эшмәкәрлеген нисек баһалар инегеҙ?***

**(Башы 1-се биттә).**

***Фаил ФӘТХЕТДИНОВ, "Ҡыҙыл таң" гәзите баш мөхәррире:*** Төбәктәрҙә тотороҡло сәйәси хәл булдырыуҙа һәм уны тейешле кимәлдә һаҡлауҙа, һис һүҙһеҙ, киң мәғлүмәт сараларының йоғонтоһо ҙур, сөнки халыҡ мәғлүмәт сараларына ышана, республикалағы хәлдәрҙе уның аша күҙәтеп бара, уға ҡарап фекер йөрөтә. Рәсәй Президенты янындағы Милләт-ара мөнәсәбәттәр буйынса Совет ултырышында әйтелгән тәнҡит, минеңсә, нигеҙҙә Үҙәк мәғлүмәт сараларына ҡағыла, тип уйлайым. Башҡортостандың киң мәғлүмәт саралары халыҡтар дуҫлығын нығытыу, халҡыбыҙҙа илһөйәрлек рухы тәрбиәләү йүнәлешендә арымай-талмай ең һыҙғанып эшләй, тип әйтә алам. Мәҫәлән, бына беҙҙең "Ҡыҙыл таң" гәзитен генә алып ҡарайыҡ: ул татар телендә нәшер ителеүгә ҡарамаҫтан, Башҡортостандағы барлыҡ милләттәр тормошон да сағылдырырға тырыша. Әгәр кеше эше менән матур ҡаҙаныштарға өлгәшкән икән, өҫтәүенә, өлгөлө ғаилә башлығы ла, ти. Беҙ уны, ниндәй милләттән булыуына ҡарамаҫтан, гәзитебеҙ геройы итеп һайлайбыҙ. Ай һайын "Дуҫлыҡ менән көслөбеҙ" тигән махсус бит донъя күреп килә. Ике-өс йыл элек кенә тап ошо цикл федераль кимәлдә юғары баһаға лайыҡ булды: 700-ләп төрлө төбәк баҫмалары араһында халыҡтар дуҫлығын яҡтыртыу буйынса махсус конкурста гәзитебеҙ 1-се урын яуланы. Республикабыҙҙа йәшәүсе 100-ҙән ашыу төрлө халыҡтарҙың мәҙәниәтен, традицияларын өйрәнеүгә лә ҙур иғтибар бирәбеҙ: Башҡортостан районларына бағышлап, "Нур" татар театры бинаһында "Ҡыҙыл таң"дың йырлы кистәре" тигән сара үткәрелеп килә. Һәр кисәлә бер район беҙҙә ҡунаҡта булып, баш ҡала тамашасыларын ошо районда йәшәүсе төрлө милләттәрҙең йыр-бейеүҙәре, йолалары менән яҡындан таныштырып ҡайта. Минең уйымса, иң мөһиме - урындағы халыҡтарҙың үҙ-ара аңлашып, берҙәм йәшәүе. Шул саҡта ғына халыҡ ситяттар ҡотҡоһона бирелмәй, тыныс йәшәй ала.

***Фәнил КҮЗБӘКОВ, тарих фәндәре кандидаты, филология фәндәре докторы, БДУ профессоры:*** Дөйөм алғанда, беҙҙең ваҡытлы матбуғат консерватив рухлы булып ҡала килә. Бындай баһа менән мин гәзит-журналдарыбыҙҙы маҡтарға ла, хурларға ла йыйынмайым. Хикмәт шунда: консервативлыҡты, тота килеп, насар йә яҡшы тип кенә тамғалап булмай. Бөгөнгөләй тотороҡһоҙ заманда бигерәк тә. Әммә һәр нәмәнең, һәр күренештең ике яғы булған кеүек, һил тормош та екһетә әҙәм балаһын. Әйтмәксемен, хәбәрсе шаҡ ҡатырғыс ваҡиғалар артынан ҡыуыуҙы үҙмаҡсат итеп ҡуймаған хәлдә лә, кәрәкле проблемаға күҙ йоммаһын ине. Йәмәғәтселеккә ысынбарлыҡты сағылдырған мәғлүмәт ваҡытында барып етһен, уны ҡабартырға ла, шымартырға ла һис ярамай. Ҡарамаҡҡа ябай ғына талап, әммә уның өсөн хәбәрсенән граждандарлыҡ ҡыйыулығы талап ителә. "Миңә лә йәшәргә кәрәк!" тигән принцип менән хәбәрсе вазифаһын тейешенсә атҡарып булмай. Әйткәндәй, әлеге Милләт-ара Совет ултырышында журналистың Һөнәри этикаһы кодексы тураһында ла һүҙ булды бит. Тиҙҙән, декабрь айҙарында, ҡабул ителәсәк бына ошо документ тап бөтөн ваҡиғаларҙы, шул иҫәптән милләт-ара мәсьәләләрҙе лә, яҡтыртыуҙа һәм илдә милли тотороҡлоҡ, тыныслыҡ һаҡлауҙа әҙәплелек, тотанаҡлылыҡ кеүек сифаттарҙы күҙҙә тота ла инде.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле тамамлана. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана.**

● Шулай итеп, 2014 йылдың беренсе яртыһына 50665 индекслы **"Киске Өфө"** гәзитенә **384 һум 36 тингә**, 50673 индекслыһына (предприятие һәм ойошмалар өсөн) 414 һум 36 тингә яҙылырға була.

Ноябрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе тәүге 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ -**"400 башҡорт халыҡ йыры"**, 10 уҡыусыбыҙ - **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыбыҙ 2014 йылға **"Башҡортса дини календарь"**, 10 уҡыусыбыҙ **Гөлфиә Янбаеваның "Елле фекерҙәр елгә осмаһын"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға **330 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йәшнигә юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға **246 һум.**

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **246 һум.**

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов "Башҡортостан Республикаһында Яңы 2014 йылды байрам итеү тураһында" Указға ҡул ҡуйҙы. Указға ярашлы, 23 декабрҙә Башҡорт дәүләт аграр университетының Йәштәр һарайында Президент Яңы йыл шыршы байрамы үткәреләсәк. Башҡортостан ҡалаларынан һәм районларынан байрамға уҡыу алдынғылары, предмет олимпиадаларында һәм спорт ярыштарында еңеүселәр, хәрби бурысын үтәгәндә һәләк булған хәрби хеҙмәткәрҙәр һәм эске эштәр органдары хеҙмәткәрҙәре балалары, шулай уҡ күп балалы аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙән балалар иҫәбенән уҡыусылар саҡырыласаҡ.

✓БР Президенты Рөстәм Хәмитовтың Цзянси провинцияһы делегацияһы менән осрашыуында Башҡортостан менән Ҡытай Халыҡ Республикаһының Цзянси провинцияһы араһында иҡтисад һәм гуманитар өлкәләрҙә хеҙмәттәшлек йүнәлештәре билдәләнде. Рөстәм Хәмитов фекеренсә, төбәктәр машиналар эшләүҙә, металлургияла, игенде тәрән эшкәртеү, туризм өлкәһендә уңышлы хеҙмәттәшлекте юлға һала ала. Ул шулай уҡ республиканың заманса автомобиль юлдары селтәрен үҫтереүгә, торлаҡ төҙөлөшө темптарын арттырыуға һәм ҡунаҡхана сервисын киңәйтеүгә ихтыяжын билдәләне.

✓Башҡортостанда Рәсәй Федерацияһы Конституцияһын һәм Башҡортостан Республикаһы Конституцияһын ҡабул итеүгә 20 йыл тулыу менән бәйле тантаналар үтәсәк. Был турала бойороҡҡа 12 ноябрҙә Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов ҡул ҡуйҙы. 19 декабрҙә Өфөлә тантаналы йыйылыш үткәрелә. Республика ғилми-ғәмәли конференцияһы ла ошо ваҡиғаға арналасаҡ.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов үҙ Указы менән Евгений Мавринды Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - Башҡортостан Республикаһының иҡтисади үҫеш министры итеп тәғәйенләне. Республика Президентының икенсе Указы менән Александр Марьин үҙ теләге менән Башҡортостан Республикаһының иҡтисади үҫеш министры вазифаһынан бушатылды.

✓Рәсәй Федерацияһы Үҙәк банкы Рәйесе ҡарары менән РФ Үҙәк банкының Башҡортостан Республикаһы Милли банкы рәйесе вазифаһына 2013 йылдың 13 ноябренән Марат Кашапов тәғәйенләнде, тип хәбәр итә БР Милли банкы матбуғат хеҙмәте.

✓ *Әгәр ҙә кемдер ситтән ауылға килеп йорт һатып ала икән, ул ер һатып алыусы ла. Ә инде йортон һатыусы кеше - тыуған ерен һатыусы. Был мәсьәләгә ошондай киҫкенлектән сығып ҡарағанда ғына нимәлер эшләп булыр һымаҡ.*



ШАҢДАУ

# КӘРӘГЕҢ ТИРӘГЕНДЕ ЙЫҠТЫРА...



## Йорт-ер һатыу фәлсәфәһе шулай



**Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай "Ереңде һатһаң, ауылыңа һат..." мәҡәләһендә барыбыҙ өсөн дә мөҡәддәс булған ер мәсьәләһен күтәрә. Тик ул мәсьәләнең мөһимлеген аңлау кимәле генә төрлө урында төрлөсә. Кемгә-кемгә, республиканың аҫаба халҡы өсөн был аңлау тик бер генә төрлө булырға тейештер. Ысынлап та, әгәр ҙә йоҡлап ятһаҡ, киләсәктә халҡыбыҙ тыуған ерһеҙ, ауылһыҙ тороп ҡалмаҫ, тимә. Районыбыҙҙа ошо мәҡәлә айҡанлы ойошторолған һөйләшеүҙәрҙән аңлашылыуынса, был мәсьәләгә ҡарата беҙ, ауылдар халҡы ғына түгел, етәкселәр ҙә битараф түгел икән. Ә был бик мөһим, йәмәғәт.**

Минеңсә, был турала туҡтауһыҙ яҙырға ла яҙырға кәрәк. "Киске Өфө"нөң был аҙымын башҡа башҡорт, татар, урыҫ телле республика баҫмалары ла, радио һәм телевидение ла эләктереп алһын ине. Тик шул саҡта ғына мигранттарҙың, гастарбайтерҙарҙың беҙҙең ерҙәрҙе, ауылдарҙы яулауына дәүләт кимәлендә ышаныслы сик, кәртә ҡуйып булыр ине. Дәүләт кимәлендә, тиеүем шунан: бары тик йәмәғәтселек аңын уятып ҡына илебеҙгә һәм еребеҙгә ташҡын булып ағылыусы мигранттар һөжүменә ҡаршы тороп булмайҙыр.

Хәҙер шундай һорауға яуап эҙләп ҡарайыҡ: ни өсөн ауыл кешеһе үҙенең йортон, ерен ситтәргә һата һуң? Тағы ла шундай бер һорау: ул йортон, ерен байығыр өсөн һатамы, әллә һатырға мәжүр буламы? Ошо урында халҡыбыҙҙың "Кәрәгең тирәгенде йыҡтыра" тигән әйтеме иҫкә килеп төшә. Һүҙ юҡ, күптәр үҙ йортон тормош проблемаһын хәл итеү өсөн аптырағандың көнөнән һата. Кемдер берәү балаһын уҡытырға тырыша, кемеһелер машина һатып ала, өҫтөн, йорт-ҡаралтыһын бөтәйтә, йәғни был ғәмәлдең артында ниндәйҙер донъяуи ихтыяжды ҡәнәғәтләндереү маҡсаты ята.

Кәрәгең хәҙерге заманда йорт янындағы тирәгенде генә йыҡтырып ҡалмай, ә йортоңдо ла һаттыра. Ә ситтән килгән һатып алыусы өсөн йорт һатып алыу ергә, яңы йәшәү урынына, картуфлыҡҡа, баҡсалыҡ, көтөүлек, сабынлыҡ урынына эйә булырға һылтау ғына. Шуға күрә лә, бындай сауҙа акты йорт һатыу булып аңлашылһа ла, ғәмәлдә ул ер һатыу тип атала һәм юридик яҡтан да шулай аталырға хаҡлы. Тимәк, әгәр ҙә кемдер берәү ситтән ауылға килеп йорт һатып ала икән, ул ер һатып алыусы ла. Ә инде йортон һатыусы кеше - тыуған ерен һатыусы. Был мәсьәләгә фәҡәт ошондай киҫкенлектән сығып ҡарағанда ғына нимәлер эшләп булыр һымаҡ. Ни өсөн тигәндә, йортон ситтәргә һатыусы кешенең был аҙымы бер ниндәй ҙә закондар менән сикләнмәй һәм һатыусы менән һатып алыусы һатыу-һатып алыу актын законлы нигеҙгә индерер өсөн урындағы власть органдарына мөрәжәғәт иткәндә һис бер ҡаршылыҡ күрмәй. Ә инде йортон ситтәргә һатыусыға тыуған ерен, ауылдаштарын һатыусы тигән ярлыҡты фәҡәт йәмәғәтселек кенә таға ала.

Ә ҡасан, ҡайҙа ситтән килеүселәрҙең ауыл халҡы менән бер төптән, бер рухта булып, көңгөр-ҡаңғыр йәшәп ятҡанын күргәнегеҙ бар? Был йәһәттән башҡорт халҡының республикабыҙҙың төньяҡ-көнбайышында бик күңелһеҙ тәжрибәһе бар. Тап ошо арҡала халҡыбыҙҙың ҙур өлөшө күрше халыҡтың ассимиляцияһына дусар булды. Хәҙер ул яҡтарҙа "татар осо", "башҡорт осо" тигән төшөнсәләр ҡарттарҙың хәтерендә генә тороп ҡалған. Дөрөҫөн әйткәндә, Әхмәр ҡусты үҙенең мәҡәләһе менән беҙҙең халыҡ өсөн үтә мөһим булған көнбайыш башҡорттары проблемаһын да иҫебеҙгә төшөрөп иҫкәртә.

**Зөфәр КИЛДЕБАЕВ.**
**Баймаҡ районы**
**Мерәҫ ауылы.**

# КИТАПХАНАСЫЛАРЫБЫҘ...

## күп эштәрҙең башында



**Әхмәр Ғүмәр-Үтәбайҙың "Киске Өфө"лә баҫылған "Ереңде һатһаң, ауылыңа һат..." тигән мәҡәләһе буйынса Баймаҡ районында үткән һөйләшеүҙәрҙе мин халыҡ фекерен властарға, республика йәмәғәтселегенә еткерергә ынтылыуҙың бер уңышлы формаһы тип атар инем. Иҫке Сибай, Сыңғыҙ, Ниғәмәт ауылдарында үткән ошо ҡорҙарҙың дилбегәһен Баймаҡ районы башҡорттары ҡоролтайы тотһа ла, был сараның артында Баймаҡ Үҙәкләштерелгән китапханалар селтәре (директоры Луиза Дәүләтшина) коллективы, уның ауылдарҙағы китапханасылары торғанлығын барыбыҙ ҙа яҡшы беләә.**

Ниғәмәт ауылындағы йыйылышта мин дә ҡатнаштым, миңә бигерәк тә Темәс ауылы биләмәһе башлығы Рауил Йәнсуриндың сығышы оҡшаны. Биләмә башлығы дөрөҫ әйтә: ысынлап та, беҙ әле ер мәсьәләһенең ни тиклем киҫкен торғанлығын бар тулылығында аңлап та бөтмәйбеҙҙер. Рауил Хөрмәт улы үҙ сығышында беҙҙең элекке совхоз ерҙәрен ҡулына төшөрөргә самалаған курдтар, әзербайжандар, әрмәндәр хаҡында әйтте. Улар бөгөн асыҡтан-асыҡ беҙҙең ерҙәргә хужа булырға ынтыла. Әле Дәүләт Думаһы мигранттарҙың беҙҙең илде яулауын сикләү буйынса ниндәйҙер закон ҡабул итергә йыйына. Был турала ишетеп ҡалған беҙҙең райондағы әрмәндәр граждандыҡ, даими паспорт, теркәлеү мәсьәләһен хәл итеп ҡуйҙылар инде, тип ишеттем. Халыҡ белмәй һөйләмәҫ. Ана бит, тәтешлеләр был мәсьәләне ниндәй кимәлдә хәл иткән. Ә беҙ әле тик ошо хаҡта ҡоролтайҙар йыйып һөйләшә генә башланыҡ. Күп нәмәгә һуңлайбыҙ шул. Әгәр ҙә "Киске Өфө"ләге мәҡәләне Баймаҡ китапханаһы иғтибар үҙәгенә алмаған булһа, был сара ла уҙмаҫ ине, моғайын. Ә был сара үҙ яҙмышыбыҙҙы, үҙебеҙҙең еребеҙ, илебеҙ яҙмышын үҙ ҡулыбыҙға алырға кәрәклеген ныҡлап аңғартты. Әгәр ҙә ошоно эшләмәһәк, ысынлап та, беҙҙең ергә ҡалын кеҫәле олигарх ирегеттәр генә түгел, Луиза Ҡаһарман ҡыҙы әйтмешләй, "аяҡ тырнаҡтары ҡыҙылға буялған" ханымдар ҙа хужа булып аласаҡ.

Үҙемдең баштан үткән бер хәл. 90-сы йылдар башында киң билдәлелек шарттарында мин "Иҫҡужин Әбдрәхим" тигән псевдоним менән үҙебеҙҙең район гәзитендә революция, граждандар һуғышы осоронда ауылдарыбыҙҙы ҡан илатҡан Поленевтар, Смоленск полкы хаҡында, уларҙы "ҡыҙыл эсэсовсылар" тип атап, мәҡәлә баҫтырғайным. Әйтергә кәрәк, ошо мәҡәлә баҫылғандан һуң Темәс янында Смоленск полкы иҫтәлегенә ҡуйылған обелиск янында балаларҙы пионер сафына ҡабул итеү туҡтатылды, һәйкәл дә икенсе исем менән атала башланы. Темәстәге полк исемендәге урамдың да яҙыуы алмаштырылды.

**БАҠТИҺӘҢ...**

**Беҙ үҙебеҙҙең ҡулдағы мөмкинлектәр менән генә лә үҙебеҙҙең тормошто яҡшыртыу буйынса күп нәмәне эшләй алабыҙ икән. Үтәбай кеүек проблема күтәреп яҙыусылары, Луиза Дәүләтшина кеүек ойоштороусылары булғанда, әлбиттә...**

**Әкрәм ҠӘЙЕПҠОЛОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Рәсәй һәм БДБ буйынса "Боинг" компанияһы президенты Сергей Кравченко менән осрашты. Авиатөҙөлөш өлкәһендә хеҙмәттәшлек перспективалары, "Боинг" компанияһын сервис хеҙмәтләндереү үҙәктәрен ойоштороуға республика предприятиеларын йәлеп итеү мөмкинлектәре тикшерелде, тип хәбәр иттеләр төбәк башлығының матбуғат хеҙмәтенән.

✓Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры коллективын яңы директор - Флүр Саламатов менән таныштырҙылар, тип хәбәр иттеләр БР Мәҙәниәт министрлығы матбуғат хеҙмәтенән. Флүр Билал улы Саламатов 1971 йылдың 21 ғинуарында Башҡортостандың Хәйбулла районы Байғусҡар ауылында тыуған. 1998 йылда Сибайҙа Башҡорт дәүләт университетының юридик факультетын тамамлай. Театрға эшкә килгәнсе 2011 йылдан 2013 йылға тиклем Өфөнөң Орджоникидзе районы ЗАГС бүлеге начальнигы урынбаҫары була.

✓РФ Төбәктәр үҫеше министрлығында 2012 йыл һөҙөмтәләре буйынса "Рәсәйҙең иң төҙөкләндерелгән ҡала (ауыл) биләмәһе" исеменә бөтә Рәсәй конкурсына йомғаҡ яһалды. Стәрлетамаҡ 100 мең һәм унан күберәк халыҡ йәшәгән ҡала округтары араһында Рәсәйҙә иң төҙөкләндерелгән ҡала тип танылған. Бүләкләнеүселәр иҫәбенә Октябрьский ҡалаһы ла ингән.

✓Башҡортостандың Иглин районы Ләмәҙ ҡасабаһында Рәсәй атомы радиоактив ҡалдыҡтарҙы күмеү пунктын урынлаштырырға планлаштырыуы тураһында таралған имеш-мимештәргә бәйле, республика башлығының матбуғат сәркәтибе Артем Вәлиев "Башинформ" агентлығына, Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов республикала радиоактив ҡалдыҡтарҙы күмеү пунктын урынлаштырыуға ҡаршы, тип белдерҙе. "Башҡортостан етәкселегенә беҙҙә ядро ҡалдыҡтарын күмеүҙе урынлаштырыу тураһында тәҡдим менән бер кем дә сыҡманы. Президенттың был мәсьәлә буйынса позицияһы ҡәтғи: ул - ҡаршы. Бөгөн был инициативаны кем күтәреүен асыҡлаясаҡбыҙ", - тип белдерҙе БР Президентының матбуғат сәркәтибе.

✓"Башавтотранс" ҡала автобустарында йөрөү 18 ноябрҙән 3 һумға ҡиммәтләнәсәк: ҡулаҡсаһыҙ түләү буйынса билет хаҡы 15 һум тәшкил итәсәк, ә ҡулаҡса менән түләгәндә - 18 һум. Шәхси маршрут такси водителдәре лә хаҡтарҙы күтәрҙе. Мәҫәлән, "Пазик"тарҙа юл йөрөү хаҡы хәҙер 20 һум тора.

**“Башинформ”дан.**

***✓ Һәр пенсионерға социаль өҫтәмә күләме уның матди тәьминәтенең дөйөм суммаһы йәшәү минимумы күләменән күпмегә түбәнерәк булыуға бәйле.***



*БАШ ЙОРТТА*



# ӨФӨ ҮҪӘ, ҘУРАЯ...
## тик йәшеллек тарая

**Өфөгә бынан сирек быуат элек килдем, шуға ҡаланы яҡшы беләм, тип әйтә алам. Элегерәк, беҙ студент саҡта, кинотеатрҙа АҠШ-та төшөрөлгән берәй фильм ҡарайбыҙ ҙа, сағыу неон уттар менән балҡыған урамдарҙы күреп, хайран ҡалып: "Өфө лә берәй мәл ошолай яҡты, сағыу булырмы икән?" - тип уйлай торғайныҡ. Кинотеатрҙан сыҡҡас, Өфө ысынбарлығы "ергә төшөрә": бағаналарҙың һирәк-һаяғында ғына уттар яныуына, урамдарҙа йәмәғәт транспортының, бигерәк тә, таксиҙарҙың һирәк йөрөүенә шаһит булаһың.**

Шулай ҙа ул мәлдәрҙә лә баш ҡалабыҙ, үҙенең "баш ҡала" тигән исеменә күрәлер, беҙҙең өсөн иң матур, иң сағыу ҡала булып күренде. Был осорҙа башҡорт йәштәре "Салауат Юлаев" майҙанында осраша, киске уйындар ойоштора, йәнле аралаша ине. Ритайымдар әле лә һағындыра. Йәштәрҙең бүтән ерҙә осрашыуын хәтерләмәйем...

Илебеҙ өсөн ауыр 90-сы йылдарҙа Өфөлә лә йәнлелек, хәрәкәт, үҫеш кәмене, бер мәл бар нәмә: төҙөлөш тә, ремонт эштәре лә туҡтап ҡалған һымаҡ тойолдо. Арыу ғына ваҡыт үткәндән һуң, Өфөбөҙҙә яңынан төҙөлөштәр башланды, төҙөлөп бөтмәгән объекттар төҙөп бөтөрөлдө, ҡалала йәнлелек артты. Ул мәлдә мин эшләй инем инде. Йәйге ялға тип ауылға ҡайтып, йәйҙе тыуған яҡта үткәреп килеүгә, баш ҡаланың ҡайһы бер урындары танымаҫлыҡ хәлдә үҙгәргән була. Бөгөнгө Өфө менән беҙҙең студент саҡтағы Өфө араһында айырма ер менән күк араһы: магазиндарҙа, башҡа күңел асыу, ял итеү урындарында матур ремонттар эшләнгән, бөтөн ерҙә таҙалыҡ, теүәллек, мөһабәт күркәмлек тантана итә. Беҙ, ял итеү форсаты тейһә, ғаиләбеҙ менән Салауат Юлаев һәйкәле урынлашҡан майҙанда, түңәрәк күлле Якутов исемендәге паркта йөрөргә, театрҙарҙа ял итергә яратабыҙ. Балаларға - М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрындағы ҡышҡы баҡса, үҙемә Башҡорт дәүләт академия драма театрындағы ижади, милли мөхит оҡшай. Спектакль башланғансы театрҙа таныштар менән аралашып, күңел рәхәте алаһың. Ғөмүмән, Өфө ҡалаһы халҡы үҙенең театрҙары менән хаҡлы рәүештә ғорурлана ала.

Баш ҡалабыҙ тағы ла матурыраҡ, күркәмерәк булһын тип, үҙемдең бер-нисә теләгемде лә еткергем килә. Тәү сиратта, бөгөн алып барылған программалар дауам итһен, Өфөнөң үҙәк урамдарына ла, ситтәрәк урынлашҡан, "ҡунаҡтар йөрөтөлмәгән" урамдарына ла, Өфө янындағы ауылдарға ла иғтибар тейешенсә бүленһен ине. Юғиһә, минең ҡайһы бер уҡыусыларым әйтеүенсә, һәм уларҙың йорттарына йөрөгән саҡта үҙ күҙҙәрем менән күргәнем бар - ҡайһы бер урамдарҙа юлдар яңыртылмай, ҡыш көндәрендә ҡарҙан таҙартылмай. Былар урындағы халыҡҡа уңайһыҙлыҡтар тыуҙыра.

Тағы: баш ҡала урамдарында һуңғы йылдарҙа юлдар киңәйтелде, йәйәүлеләр өсөн юлдар йорттарға "терәтеп" күсерелде. Шунлыҡтан халыҡ араһында ағастар ҡырҡылыуға ҡарата ризаһыҙлыҡ тыуҙы. Әлбиттә, шунһыҙ булмайҙыр ҙа, ни тиһәң дә, ҡайһы саҡта бер яҡшы эш, яҡты киләсәк өсөн нимәнелер ҡорбан итергә лә тура килә. Ҡаланы йәшелләндереү - ағастар ултыртыу тағы ла йәнлерәк атҡарылһын, тип теләйем. Ана бит, һуңғы бер-ике йыл эсендә ниндәй матур сәскә түтәлдәре барлыҡҡа килде.

Әйткәндәй, яңыраҡ үҙемдең 7-се синыф уҡыусыларым менән "Өфө: кисә, бөгөн, иртәгә" тип аталған класс сәғәте үткәргәйнем. Балалар ҙа баш ҡаланы яратыуы тураһында һөйләне. Шуныһы ҡыҙыҡ: күптәр үҙҙәре йәшәгән райондан башҡа райондарҙы, ҡайһы берәүҙәр Өфөнөң иҫтәлекле урындарын белмәй ҙә булып сыҡты. Ниҙән был? Ҡаланың ҙурлығы арҡаһындамы, әллә башҡа сәбәп бармы? Мине ошо һорау ҙа ҡыҙыҡһындыра.

**Эльза ТОЛОМБАЕВА,**
**Өфө ҡалаһының 35-се мәктәбе**
**башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.**

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# РЕСПУБЛИКА БАШЛЫҒЫМЫ?



**Башҡортостан Президенты БР Конституция судының субъект етәксеһе вазифаһы атамаһын үҙгәртеүгә ҡарата инициативаһына үҙ фекерен белдерҙе.**

- Республика башлыҡтарын президент тип түгел, ә икенсе төрлө атау тураһында закон ҡабул ителгәс, республиканың Конституция суды, бындай закондың булыуын иғтибарға алып, республиканың иң юғары вазифалы кешеһен "президент" тип атауҙан туҡтарға һәм 2015 йылдың 1 ғинуарынан был вазифаны "Глава Республики Башкортостан" тип атарға тәҡдим итте - тип билдәләне Рөстәм Хәмитов. - Башҡортса атамаһына килгәндә, әле фекер алышырға кәрәк буласаҡ. Белеүемсә, һуңғы ҡарарға киленмәгән әле. Варианттар араһында "ил башы", "хаким", "республика башлығы" тигәндәре бар, уларҙың барыһын да тикшерергә кәрәк. Депутаттар ниндәйҙер ҡарар ҡабул итер, моғайын. Бында бер ниндәй ҙә сенсация юҡ. Был ҡәҙимге процесс. Бер яҡтан, ул техник мәсьәлә, ә икенсе яҡтан -Конституцияны федераль ҡануниткә тап килтереү.

# ИСЕМЛЕКТӘ - "УРАЛ БАТЫР"



**Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова ЮНЕСКО Бөтә донъя мираҫының Рәсәй милли комитеты рәйесе Игорь Маковецкий менән осрашты.**

Яҡтар "Шүлгән-Таш" мәмерйәһе һәм "Урал-батыр" эпосы ингән "Башҡорт Уралы - Урал-батыр ере" ҡатнаш мәҙәни-тәбиғи объектын ЮНЕСКО Бөтә донъя мираҫы исемлегенә индереүҙе хәл итеү мәсьәләһен тикшерҙе. Тәҡдим ителгән объектты өйрәнеү маҡсатында 2014 йылдың йәйендә Башҡортостанға ЮНЕСКО-ның халыҡ-ара эксперттар делегацияһы киләсәк.

Яҡтар кисекмәҫтән мәмерйә эргәһендә музей-ҡурсаулыҡ асыу зарурлығын раҫланы. Шулай уҡ Игорь Маковецкий, ҡалалар төҙөү һәм архитектура ҡомартҡыларын һаҡлау буйынса ЮНЕСКО кафедраһының Өфө филиалына практик ярҙам күрһәтеүҙәрен үтенде, тип хәбәр итә БР Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәте.

# БАР ЮЛДАРҘА ЛА...



**Төп федераль автомобиль юлдары 2014 йылға тиклем кәрәҙле элемтә менән тәьмин ителергә тейеш. Был хаҡта, РФ Элемтә һәм киң коммуникациялар министры Николай Никифоров әйтте.**

- Беҙҙең бөтә төп транспорт коридорҙары элемтә менән мотлаҡ тәьмин ителергә тейеш, һәм беҙҙең алда 2014 йылда "М" категорияһы федераль трассаларын тулыһынса кәрәҙле элемтә селтәре менән тәьмин итеү бурысы тора, - тип белдерҙе Никифоров. Уның һүҙҙәренә ҡарағанда, база инфраструктураһына сығымдарҙы дәүләт үҙ өҫтөнә ала. Бизнес өсөн был проект килемле булмаһа ла, кәрәҙле элемтә операторҙары юлдарҙа ҡорамалдарҙы урынлаштырырға ризалашты.

Башҡортостан Республикаһы территорияһынан "М" категориялы федераль әһәмиәттәге ике трасса үтә - М5 "Урал" һәм М7 "Волга".

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# СОЦИАЛЬ ӨҪТӘМӘ АРТА



**БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың сираттағы ултырышында Башҡортостанда 2014 йылда пенсияға социаль өҫтәмә билдәләү өсөн быйылғы 5690 һум урынына 6070 һум күләмендә йәшәү минимумы күләме раҫланды.**

2014 йылдың 1 ғинуарынан республиканың 133 меңдән ашыу бер ҡайҙа ла эшләмәүсе пенсионеры пенсияларына яңы күләмдә федераль социаль өҫтәмә аласаҡ.

Хәтерегеҙгә төшөрөп китәйек: был төр өҫтәмә түләү бер ҡайҙа ла эшләмәүсе пенсионерҙарға 2010 йылдың 1 ғинуарынан билдәләнгәйне. Һәр пенсионерға социаль өҫтәмә күләме уның матди тәьминәтенең дөйөм суммаһы йәшәү минимумы күләменән күпмегә түбәнерәк булыуға бәйле. 2014 йылдың 1 ғинуарынан пенсияһына социаль өҫтәмә тәғәйенләү өсөн ғаризаны уға хоҡуғы түләп асыҡланған кешеләр генә яҙа ала. Ғариза яҙыусы уны Пенсия фонды идаралығының үҙе пенсия алған урыны буйынса ошо йылдың декабрендә бирергә бурыслы, сөнки социаль өҫтәмә ғариза биргән айҙан һуң килгән айҙың 1-се көнөнән тәғәйенләнә. 18 йәше тулмаған пенсия алыусыларға социаль өҫтәмә ғариза яҙмайынса ла тәғәйенләнә.

Рәсәй Пенсия фондының БР буйынса идарасыһы Фоат Хантимеров әйтеүенсә, быйылғы 10 айҙа федераль бюджеттан социаль өҫтәмә түләүгә киткән сығымдар 1 миллиард 345 миллион һум, ә өҫтәмәнең уртаса күләме 1310 һум тәшкил итте.

**Рәсәй Пенсия фондының БР буйынса бүлексәһе матбуғат хеҙмәте.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө хакимиәте башлығы Ирек Ялалов оператив кәңәшмәлә боҙ ҡаласыҡтары төҙөлөшөнөң альтернатив варианттарын ҡарарға бойороҡ бирҙе. "Быйыл аномаль йылы һауа торошон күҙҙә тотоп, боҙ ҡаласыҡтарының әҙерлеге борсолоу тыуҙыра. Әгәр боҙ туңып өлгөрмәһә, фанера һәм пенопластан төҙөйәсәкбеҙ. Бындай практика беҙҙә бар, 2008 йылда һауа торошонон көйһөҙлөгө арҡаһында декораторҙар ҡарһыҙ һәм боҙһоҙ ҡалғайны", - тине Ирек Ялалов.

✓Ҡышҡы миҙгелгә әҙерләнеү сиктәрендә Өфө ихаталарында хоккей ҡумталарын алмаштырыу буйынса былтыр башланған эштәр дауам иттереләсәк. "Әлеге ваҡытта урамдарҙа булған таҡтанан ҡағылған хоккей ҡумталары артта ҡалырға тейеш. Хәҙер беҙҙә ошондай 80 ҡумта бара. Улар урынына заманса һәм хәүефһеҙҙәре төҙөлөргә тейеш. Был бик ҡиммәтле проект. Бюджетҡа ғына ышанырға түгел, ә бағыусыларҙы, эшҡыуарҙарҙы ла йәлеп итергә кәрәк", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Өфө ҡалаһы башлығы булып үткән оператив кәңәшмәлә.

✓Рәсәй Дәүләт гимны яңы уҡыу йылы башының тәүге дәресе алдынан, шулай уҡ дәүләт һәм муниципаль байрамдарға арналған тантаналы саралар барышында, милекселек формаһына ҡарамаҫтан, бөтә дөйөм белем биреү һәм һөнәри белем биреү ойошмаларында башҡарыласаҡ. Дәүләт флагы һәм гимны тураһында закондар статьяларына үҙгәрештәр индереү тураһындағы был закон проектын Дәүләт Думаһына Рәсәй Президенты Владимир Путин индерҙе. Төҙәтмәләр шулай уҡ, ниндәй милекселек төрөндә булыуына ҡарамаҫтан, дөйөм белем биреү ойошмалары биналарында Рәсәй Федерацияһы Дәүләт флагы даими эленеп торорға тейешлеген билдәләй.

✓Башҡортостан Хөкүмәте бойороғо менән республикала "Халыҡты социаль яҡлау үҙәге" дәүләт ҡаҙна учреждениеһы булдырыла. Уны ойоштороусы - БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы. Ведомствоға 2 декабргә тиклем яңы учреждение уставын раҫларға һәм уны рәсми теркәү өсөн документтар әҙерләп бирергә, структураны, финанслау сығанаҡтарын һәм күләмдәрен, шулай уҡ үҙәктең оператив идаралығына тапшырыласаҡ күсмә һәм күсемһеҙ милек исемлеген билдәләргә ҡушылды. Бойороҡҡа ярашлы, яңы учреждение штатында 1428 берәмек ҡаралған.

АФАРИН!

**Ошо көндәрҙә Өфөлә "Шаяндар һәм отҡорҙар клубының Башҡорт асыҡ лигаһы" БР төбәк йәмғәт ойошмаһы ойошторған сирек финал уйындары үтте. Сараның маҡсаты - башҡорт телендә шаяндар һәм отҡорҙар хәрәкәтен үҫтереү, йәштәр араһында башҡорт телендә аралашыуҙы йәнләндереү. 2012 йылдың йәйендә генә ойошторолған ойошманың үҙ алдына ҡуйған маҡсаттары бының менән генә сикләнмәй. Ойошма әүҙем, оптимистик рухлы, сәйәсәткә үҙ ҡарашы булған һәм фекерен көлкө, кинәйә, төртмә һүҙ формаһында халыҡҡа еткерә белгән йәштәр тәрбиәләүҙе лә маҡсат иткән. Фестивалдән күренеүенсә, маҡсаттарға өлгәшелә башлаған да инде. Быға республикабыҙҙың төрлө төбәктәренән йыйылған 12 команда сығыштары асыҡ дәлил. Шулай итеп, бәйгелә: Әбйәлилдән - "Тетрис", Белореттан - "Икегә ике", Баймаҡтан - "Сәйнүк", Ейәнсуранан - "Бытбылдыҡ", Мәскәүҙән - "Хәйnation", Өфөнән - "Кәкре сүкеш", "ТТ", "Ете ҡыҙ"; укыу йорттарынан: БДУ-ның тарих факультетынан - "Өтөр", М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-нан - "Хыялыйҙар", БДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалынан - "Страйк" һәм БДУ-ның Сибай филиалынан - "Еңмештәр" командалары үҙ-ара көс һынашты. Әйткәндәй, быйылғы уйындар - лиганың икенсе миҙгеле. Тимәк, был уйындарҙы даими ҡарап барыусы тамашасыларға һәм баһалама комиссияһы ағзаларына былтырғы уйындар менән быйылғыларҙы сағыштырыу мөмкинлеге лә бирелде. Башҡортса шаяртыу күренеше ниндәй ул? Бер телдә уйлап, икенсе телдә шаяртыуҙарға нисек сик ҡуйырға? Башҡорт йәштәре саф башҡортса шаяртыуҙы нисек итеп күҙ алдына килтерә? Сара ниндәй тәьҫораттар бүләк итте? Ошо һәм башҡа һорауҙарға яуап эҙләп, ҡайһы бер ҡатнашыусыларҙан, тамашасыларҙан һәм баһалама ағзаларынан фекер емештәре тирҙек...**

# БАШҠОРТ ЮМОРЫНЫҢ...

## киләсәге төҫмөрләнә һымаҡ



**Шамил СОЛТАНОВ, БДУ-ның Сибай институты студенты, "Еңмештәр" командаһы ағзаһы:** Төрләбөҙ төрлө райондарҙан - Баймаҡ, Ейәнсура, Хәйбулла һәм Әбйәлил райондарынан, беребеҙ Сибай ҡалаһынан булғас, һәр беребеҙ үҙ ягында йөрөгән ҡыҙыҡ хәлдәрҙе хәтеренә төшөрөп, репетициялар ваҡытында тәҡдим итә. Ҡайһы бер ҡыҙыҡтарҙың сәхнәләштергән ваҡытта ҡыҙыҡ булыуҙан туҡтауы, тамашасыға аңлашылып етмәүе, йәғни беҙҙә арбаған һәҙәмтәһен юғалтыуы мөмкин. Быларҙың барыһын да иҫәпкә алырға - күнекмәләр ваҡытында телебеҙҙе шымартырға, миниатюраға яңы биҙәктәр индерергә, уны халыҡсаныраҡ итергә тырышабыҙ.

Башҡорт юморының үҙенсәлегенә килгәндә, тотош башҡорт донъяһы тураһында әйтә алмайым, шулай ҙа беҙҙең көньяҡ-көнсығыш төбәктең мәҙәкселәрен, ҡаты шаяртлалар, тиҙәр. Сайаһыҙ әсе шаяртыуыбыҙ арҡаһында беҙ ҙә йыш ҡына уңайһыҙ хәлгә тарыйбыҙ. Ҡалайтаһың, терһәкте тешләрҙәй булһаң да, әйткән һүҙҙе кире ҡайтарып булмай. Шуға, образдарҙы дөйөмләштереп, төп проблемаға мөмкин тиклем һағыраҡ ҡағылырға, проблеманы төрлө кинәйә менән ишаралап күрһәтергә тырышабыҙ. Әйткәндәй, ҡайһы бер кешеләр беҙҙең мәрәкәне аңламаһа, ул кешеләрҙән юмор тойғоһо юҡ тигәнде аңлатмай, миненсә. Көлкөнө тойоу һәләте һәр кешегә лә бирелгән. Ләкин кемдер был һәләтен тейешенсә үҫтерә, тормошҡа ашыра ғына алмаған. Кеше ана шул һәләтен асырға ынтылырға тейеш. Сөнки көләс булһаң, кешеләр менән аралашыуы ла күпкә еңелерәк, проблемалар алдында ла баҙап ҡалмайһың. Беҙ, әлбиттә, теге йәки был проблеманы күтәрәйек әле, тип, махсус рәүештә теге йәки был ижтимаҒи, сәйәси темаға ҡыҙыҡ уйлап ултырғаныбыҙ юҡ. Көлкөлө хәлдәрҙе тормош үҙе килтереп биреп кенә тора - теркәп, күнелеңә һеңдереп кенә өлгөр!

**Әлмир МӨХӘМӘТЙӘРОВ, Өфө ҡалаһы:** Әлеге сығыштарҙан һуң, башҡорт телендәге шаяртыуҙарҙың кимәле үҫә, тип ныҡлы әйтә алам. Заманында ошо сәхнәлә беҙ йөрөһәк, бөгөн унда яңы йәштәр килә. Башҡортса матур һөйләшкән, һорауына күрә тапҡыр яуабын әйтергә әҙер булған сәсән телле, отҡор йәштәребеҙ бөгөн дә бар икәненә тағы бер тапҡыр инандыҡ. Миңә был юлы "Еңмештәр" айырыуса оҡшаны. Уларҙың мәрәкәләре тәбиғи, ябай, тура булыуы менән айырылып торҙо. Фекер эйәһе "Ябайлыҡта - бөйөклөк" тип юҡҡа әйтмәгән икән. Сибайҙарҙың сығыштарын улар ҙур сәхнәлә күрелә башлағаны бирле күҙәтеп барам. Был команданың арҡаһы ныҡ икенән тәүҙә үк төҫмөрләгәйнем. Егеттәр был юлы ла һынатманы. Иң шәп сығыш уларҙыҡы булды, өлгө кимәленә күтәрелде.

Дөйөм тәьҫораттарға килгәндә, әлбиттә, ҡайһы бер командаларҙа русса уйлап, башҡортса һөйләү күренеше күҙәтелде. Баһалама ағзалары ошо һәм бүтән кәйтыршылыҡтарҙы күҙ уңында тотҡандыр, тип ышанам.

(Дауамы 16-сы биттә).

ҺОРАУ - ЯУАП

## БЫУА ТӨҘӨМӘКСЕМЕН

**Яңыраҡ 42 сотый ере менән ауылдан өй һатып алдым. Шул участкамдағы 300 кв. м. ерҙе 3 метр тәрәнлектә ҡаҙып, һыу ебәреп, унда карп балығы үрсетергә ниәтләнәм. Бының өсөн рөхсәт кәрәкме?**

- Эйе, бындай быуа төҙөү өсөн рөхсәт алыу кәрәк. Шул уҡ ваҡытта участканың йә булмаһа уның быуа эшләү өсөн планлаштырылған өлөшөнөң рөхсәт ителгән төрөн үҙгәртергә лә кәрәк булыуы бар, ләкин быныһына рөхсәт биреүҙәре икеле (РФ Ҡала төҙөлөшө кодексының 37-се статьяһы).

Әгәр ҙә был төҙөлөш объектын бетонланған бассейн рәүешендә эшләһәгеҙ, рөхсәт алып тороу кәрәкмәй. Шулай булһа ла уның күршеләрегеҙ хоҡуҡтарын боҙмауы мотлаҡ, ул шулай уҡ төҙөлөш һәм санитар нормаларға яуап бирергә тейеш. Көтөлмәгән ҡаршылыҡтар килеп тыуһаһын өсөн эшкә тотонорҙан алда юрист һәм урындағы хакимиәт вәкилдәре менән кәңәшләшеү кәрәк. Күршеләрегеҙҙән яҙма рәүештә рөхсәт алыу ҙа артыҡ булмаҫ.

## БАЛА ҮҘЕҢДЕКЕ БУЛМАҺА...

**Бер ҡатын менән гражданлыҡ никахында йәшәйем. Улының уҡыуына аҡса түләнем. Социаль һалым айырмаһын ҡайтара аламмы?**

-Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, һеҙҙең ундай хоҡуғығыҙ юҡ. Мәғариф учреждениеһының көндөҙгө бүлегендә уҡыусы 24 йәшкә тиклемге балаһының уҡыуы өсөн түләгән ата-әсәләр генә һалым айырмаһын ҡайтара ала. Үҙ аҫырауына алған көндөҙгө бүлектә уҡыусы 18 йәшкә тиклемге баланың уҡыуы өсөн түләгән опекундарға ла ошондай хоҡуҡ бирелә (РФ Һалым кодексының 219-сы статьяһының 1-се пункты). Әйтелеүенсә, әгәр һеҙ опекун да, попечитель дә булмаһағыҙ, ә бала 18 йәштән олораҡ икән, һеҙгә һалым айырмаһы түләнмәй, шуға күрә, вуз менән килешеүҙә баланың үҙе (әгәр ул эшләп тә йөрөй һәм йән башына 13 процент һалым түләй икән) йә уның әсәһе исеменә яҙҙырырға кәрәк буласаҡ.

## ХОҠУҠ ТЕРКӘҮ... ТИҘЛӘТЕЛӘ

**1 октябрҙән милеккә хоҡуҡты теркәү тәртибенә үҙгәрештәр индереүсе закон көсөнә инде. Ә үҙгәрештәр ярайһы ғына: закон нигеҙендә хәҙер был эште интернет аша ла башҡарырға була. Бөтөн кәрәкле документтарҙың электрон вариантын Росреестр сайты аша (www.rosreestr.ru) йәки дәүләт хеҙмәттәре порталы(www.gosuslugi.ru) аша ебәрергә кәрәк, ул саҡта теркәү хеҙмәте бүлектәрендә сират тороп та яфаланмаҫһығыҙ.**

Дөрөҫ, барыһы ла әле уйлағанса еңел генә түгел шулай ҙа. Электрон хеҙмәт менән файҙаланырға теләүселәргә махсус танытма үҙәк аша (был хаҡта дәүләт хеҙмәте порталынан ентекләп белешергә мөмкин) электрон ҡултамғаға эйә булыу кәрәк буласаҡ. Ә бына Росреестрға аҙағыраҡ барыбер килеп китергә тура киләсәк: хоҡуҡ теркәү тураһында әҙер таныҡлыҡты ҡулыҡҙға алыр өсөн, сөнки ул элеккесә ҡағыҙҙа килеш тапшырыла. Тағы ла шуныһы: хеҙмәтләндереүҙең электрон варианты киләһе йылдан ғына эшләй башлаясаҡ.

Тағы бер яңылыҡ - милеккә хоҡуҡ теркәү ваҡыты тиҙләтелә, ул хәҙер 18 көндән дә артып китергә тейеш түгел. Был норма ғәмәлдә лә инде.

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡайын ҡайырыһы

❖ Ашығып ниҙер эшләгәндә йә берәй ерендә киҫәһең, йә бәрәһең. Был осраҡта йоҡа ғына итеп киҫеп алынған ҡайын ҡайырыһын шул ауыртҡан урынға ябырға кәрәк. Ҡайын ҡайырыһы ҡан туҡтатыуҙа ла ҙур ярҙам итә.

### Ҡыҙыл миләш, балан, энәлек...

**Әле миләш ҡып-ҡыҙыл булып, базырайып ултыра, әммә күп кеше уға иғтибар итмәй.**

❖ Миләштең ваҡланған йәш ботаҡтарын ҡайнатылған йылы һыуға һалып, йыл буйы эсһәң, склероздан ҡотолорһоң.

❖ Иҙелгән емештәрен быуындарға япһаң, ревматизм һәм артриттан дауалай.

❖ Ҡалҡан һымаҡ биҙ ауыртҡанда ла иҙелгән емештәрҙе муйынға, тамаҡҡа ябаһың да, йылы шәл йәки шарф менән бәйләйһең.

❖ Япраҡтарын ҡышҡылыҡҡа киптереп алып, 20-30 грамм япраҡҡа 3 стакан ҡайнаған һыу ҡушып, төнгөләккә ҡалдыраһың, иртәгәһенә ашар алдынан аҙаҙлап эсәһең. Был төнәтмә бауыр, үт юлдары һәм бөйөрҙәге ташты йыуҙыра. Дауаланыу 2-3 ай дауам итә. Әммә ҡаны тиҙ ойоғандарға был алым ярамай.

❖ Балан да ошо уҡ шифаларҙы бирә.

❖ Энәлек (беҙҙең яҡта уны энәҙе, энәде тип атайҙар) ҡан әйләнешен яҡшырта, йөрәккә көс бирә. Йөрәк сирләләр уның төнәтмәһен валидол менән бергә бәләкәй генә шешәлә кеҫәһендә йөрөтһә лә була. Хәлең бөтһә, ал да эсеп ебәр.

### Тоҙ ултырһа

**Организмға тоҙ ултырһа, түбәндәге дауалар шифа бирер:**

❖ 1 кг ҡайын һәм усаҡ ҡайырыһын, 100 г имән ҡайырыһын ваҡларға һәм ҡайнатып, ҡуйы ғына һурпа яһарға. Уны көнөнә 3 мәртәбә стакандың өстән, икенән бер өлөшө күләмендә эсергә кәңәш ителә. Дауалана башлағанда ауыртыу көсәйәсәк, унан һуң йәйлап һауыға башлайһың.

Әйткәндәй, шәкәр диабеты менән яфаланғандар аҙлап ҡына усаҡ ҡайырыһы төнәтмәһен эсә ала.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

## БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

**Сиҡан** - ул башһыҙ, эренле шешек. Ул, ғәҙәттә, һыуыҡ үтеүҙән була. Сиҡан сыҡҡас, уны тиҙ генә осло нәмә (бысаҡ,энә, шырпы) менән кәртәләп алалар. Унан һуң ситтән уртаға табан сыйып, бысаҡ менән өҫтөнә әүернә эшләйҙәр һәм тимергә ете тапҡыр һуғалар. Был ваҡытта доға уҡыла:

*Бисимилләһир-рахмәнир -рахим,*
*Был тимергә китһен ауырыу.*
*Тимер! Тартып ал ауырыуҙарҙы!*
*Собханалла-машалла.*

Унан һуң Ҡөрьәндән "Ҡолһоуалла" уҡыйҙар ҙа дауалауҙы шундай һүҙҙәр менән тамамлайҙар:

*Был бәндәгә ярҙам бир,*
*Был шешектәр бөтһөн, китһен!*
*Өс көндән бөтәсәк был шешек!*

**Саҡма шеште имләү.** Ул тубыҡ башында һәм терһәктә була, өҫтө ҡыҙыл булып ҡатып тора. Уларҙың ҡайһы берҙәре шешеү һәм тулышыу ваҡытында ҡысыта. Тырнау менән ҙураялар. Шулай уҡ уларҙы ла бысаҡ менән сыялар. Был ваҡытта бындай һамаҡ әйтелә:

*Ни сағаһың? Саҡма сағам.*
*Ай ҙа ҡайтты, көн дә ҡайтты, һин дә ҡайт!*
*Бер имләйем, берҙән ҡайт!*
*Иҙел кискән - мин булдым.*
*Саҡма саҡҡан - һин булдың.*
*Ай ҙа ҡайтты, көн дә ҡайтты, һин дә ҡайт!*
*Сер имләйем, берҙән ҡайт!*

**Имсәк шешен имләү.** Ымһыныуҙан имсәк шеше була. Берәй кешегә килеп ингәндә ул тәмле итеп ашап ултырһа, һин: "Мине лә саҡырыр был табын янына", - тип ымһынһаң, "Бисмилла", тип, өс тапҡыр усты яларға. Яламаһаң, имсәк шешә.

**Зырхыуат сирен имләү.** Зырхыуат сире бик яман була. Зырхыуат менән ауырыған кешенең тәне, боттары ҡыҙыл булып шешә. Ауыртҡан ерҙе ҡыҙыл сепрәк менән урап ҡуйырға һәм үҙенең доғаһын да уҡырға кәрәк.

**Һум шешен имләү.** Кешегә һум шеше сыҡһа, бәләкәй генә сыраҡ, утын ярҡаһын алып, шуның ботағына берҙән унға ҡәҙәр, ундан бергә ҡәҙәр һанап әпсенләйҙәр. Әпсенләгәндә берәү:

- Нимә имләйһең? - ти.

- Бына һум сыҡҡан, һум имләйем, - тип урынын күрһәтәләр. "Ай ҡайтты, көн ҡайтты, һин дә ҡайт! "- тиҙәр

**Һум шешегенә бесәй ҡойроғо.** Һум шешеге - башһыҙ, биҙ кеүек үҙәкле шеш ул. Уны бесәй ҡойроғо менән дә имләйҙәр. Бесәй ҡойроғон шешеккә баҫып алып, ботаҡҡа төртәләр. Шунан бөтә, тиҙәр.

**Шишәмбе һыуы.** Шешекте имләр өсөн шишәмбе көн төндә һыу алалар, шул һыуҙы шаршамбыға ҡәҙәр ябып ултыртып ҡуялар. Шаршамбы көндө шул һыу менән ауырыуҙы ҡойондоралар. Ҡойондорғанда:

*Һыу атаһы Сөләймән,*
*Һыу инәһе Һыубикә,*
*Һеҙҙән һаулыҡ,*
*Минән яулыҡ, -*

тип һамаҡлайҙар. Шунан ҡойондоролған һыуҙы йылға аръяғына алып барып түгәләр.

**Саҡма ҡутыр име.** Башҡа саҡма ҡутыр сыҡһа, диңгеҙ кискән кешенән саҡма саҡтырып имләткәндәр. Моряк булған кеше ике ташты йә ҡайраҡ менән бысаҡты алып саға. Саҡҡанда ут сәсрәп китә, шул ут менән ҡутыр эйәһе осоп китә. Әгәр саҡма ҡутыр булһа, ҡутыр бөтә.

**Ҡутыр әпсене.**

*Ҡутыр, ҡутыр, ҡутырла...*
*Ят-ят, ятығралла...*
*Ултыр, ултыр, ултырғралла...*
*Баҫ, баҫ, баҫығралла...*
*Ос-ос, осоғралла...*
*Өф-ф-ф!*

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**

*ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ*

# ТИРӘ-ЯҒЫБЫҘҘАҒЫ ВАҠИҒАЛАР...

## беҙҙең сағылышыбыҙ ғына

**Бер уҡыусы үҙенең уҡытыусыһына ошондай һорау биргән: "Донъя кешегә ниндәй мөнәсәбәттә? Ул уға яуызлыҡ алып киләме, әллә изгелекме?" Ысынлап та, донъя ни өсөн һәр беребеҙгә төрлө булып күренә? Ни өсөн ул барыһына ла бер тигеҙ түгел? Бөгөнгө көн өсөн дә әһәмиәтен юғалтмаған был һорауға яуапты педагогия фәндәре кандидаты, доцент, Башҡортостан Республикаһы Мәғарифты үҫтереү институты психология кафедраһы мөдире Лилиә Рәшит ҡыҙы ХАЛИҠОВА менән бергәләп эҙләп ҡарайыҡ.**



Кешенең донъяға ҡарашы -субъектив күренеш. Ошо урында ябай ғына бер көләмәс иҫкә төшә. Ике кеше нимәгәлер бәхәсләшеп киткән һәм дөрөҫлөктөң кемдең яғында икәнен асыҡлар өсөн кәңәш һорап, Хужа Насретдинға килгән. Хужа тәүҙә уларҙың береһен тыңлап: "Эйе, һин дөрөҫ әйтәһең, хаҡлыҡ һинең яҡта", - тип сығарып ебәргән. Шунан икенсеһен тыңлаған һәм уға ла ошо һүҙҙәрҙе әйткән. Быны тыңлап торған ҡатыны аптырап: "Мин бер нәмә лә аңламаным, хаҡлыҡ ике яҡта ла булмай, һин дөрөҫ кәңәш бирмәнең бит", - тигән. Хужа уға ла: "Эйе, һин дөрөҫ әйтәһең", - тип яуап биргән. Йәғни, һәр кемдең тормошҡа, анһыҡ хәлгә ҡарата үҙенең ҡарашы бар һәм һәр беребеҙгә кешеләрҙе нисек бар, шулай ҡабул итергә өйрәнергә кәрәк, тигәнгә ишара был.

Ҡайһы берҙә ғаиләлә ата-әсә үҙ балаһын нисек бар, шулай ҡабул итә алмай, уны үҙенсә, икенсерәк итеп күрергә теләй. Таныштарыбыҙҙы, дуҫтарыбыҙҙы, бергә эшләгән хеҙмәткәрҙәребеҙҙе һәм башҡа кешеләрҙе үҙебеҙҙең күҙлектән сығып баһаларға күнеккәнбеҙ һәм уларҙың беҙгә оҡшамаған ҡылыҡтарын күреп, аптырап китәбеҙ. Улар һеҙҙең образдарығыҙға тап килергә тейеш тә түгел. Һәр кешенең үҙенең ыңғай, кире яҡтары бар һәм улар үҙҙәре булып ҡалырға хаҡлы. Ә кешене нисек бар, шулай ҡабул итә белеүҙең нигеҙендә иң тәүҙә үҙеңде танып, үҙ-үҙеңде ҡабул итә белергә, үҙеңдең тормошҡа ҡарашыңды аңларға кәрәк. Мин кем, нимә менән шөғөлләнергә яратам, миңә нимә оҡшай - быларға бала саҡтан уҡ төшөнөү фарыз, йәғни, үҙеңде үҫтереүҙең нигеҙендә үҙеңде танып белеү ята. Үҙеңдең асылыңды танып белеүгә халҡыбыҙ ҙа ҙур әһәмиәт биргән. Бәхетле кеше - ул үҙенең асылын танып, уны бойомға ашыра алған кеше. Берәүгә лә оҡшарға тырышмайынса, үҙеңде нисек бар, шулай ҡабул итеп, тап үҙеңә генә тәғәйенләнгән юлдан атлап, дөрөҫ маҡсаттар ҡуйып, үҙеңде үҫтерә алһаң, булмышың менән дә ҡәнәғәт булырһың.

Үҙеңде, һәләттәреңде генә түгел, хис-тойғоларыңды ла ҡабул итә белергә кәрәк. Беҙ гел генә ыңғай тойғолар менән йөрөй алмайбыҙ. Мәҫәлән, кемгәлер асыуланабыҙ һәм асыуланырға тейеш түгелбеҙ, тип уңайһыҙланып, уны шунда уҡ бикләй һалабыҙ. Ул кире тойғонан бушаныу өсөн тәүҙә уны танырға кәрәк: "Эйе, мин асыуландым, мин асыуланырға хаҡлымын". Унан һуң инде психогигиена ысулдары ҡулланып, мәҫәлән, яҫтыҡ туҡмап алырға, берәй аулаҡ урында ҡысҡырырға, көслө тауышлы музыка аҫтында бейергә, йырларға мөмкин. Иң һәйбәт ысулдарҙың береһе булып хәрәкәт тора. Мәҫәлән, бик ҡыйын булып киткән саҡта 30 минут йүгереп алырға була. Бындай ваҡытта шатлыҡ гормондары бүленеп сыға һәм кешенең эмоциональ хәле яҡшыра. Кеше үҙен аярға өйрәнергә тейеш, бөгөн шундай мөхиттә йәшәйбеҙ, беҙ үҙебеҙҙе аямаһаҡ, мөхит беҙҙе аямаясаҡ. Мәҫәлән, шул уҡ кире тойғолар йыйылып, кеше шар һымаҡ яйлап тулыша бара һәм шартлай, һөҙөмтәлә, инфаркт, инсульт кеүек сирҙәр барлыҡҡа килә. Шуның өсөн дә шарҙың бауын бер аҙ бушатып, һауаһын сығарып торорға кәрәк. Үҙеңде ҡабул итәһең, ярата һың икән, үҙеңә иғтибарлы ла булаһың. Әйткәндәй, эгоизм менән үҙеңде ратыу араһында тигеҙлек тамғаһы юҡ, улар икеһе ике төрлө нәмә. Эгоист - бер кемде лә яратмай, ул бәхетһеҙ кеше, уның эргәһендә бер кем дә бәхетле була алмай, сөнки ул үҙен дә яратмай, башҡаларҙы ла яратмай. Кеше үҙен ятатһа ғына башҡаларҙы ла ярата ала.

Кеше үҙенең тормошон үҙе булдыра һәм шуның өсөн дә ул үҙенең тормошо өсөн яуаплылыҡ тойорға тейеш. Килеп тыуған һәр проблеманы: "Ни өсөн миңә генә шулай", "Миңә шулай инде ул", тип түгел, ә бынан ниндәй һабаҡ алырға тейешмен, ни өсөн улай килеп сыҡты, был мине нимәгә өйрәтә ала, тигән яуаплылыҡ менән ҡабул итегеҙ. Сөнки шәхес булараҡ үҫешер өсөн кешегә ниндәйҙер ситуацияларҙан да үтергә кәрәк. Ошо күҙлектән ҡараһа, кеше ҡатмарлы хәлдәрҙе лә еңелерәк үткәрә. Үҙеңде иректе тойоу тойғоһона, был - минең юлым, уны үҙем һайлағанмын, тигән яуаплылыҡ ҡушылғанда ғына барыһы ла яҡшы буласаҡ.

Үҙең ниндәйһең - тормошоң да шундай, тигәндә дөрөҫлөк бар. Бөтөн уйҙарҙы, хистәрҙе контролдә тотоп булмай, әлбиттә, шулай ҙа уларҙың өҫтөндә эшләргә, тормоштоң яҡшы яҡтарын билдәләй белергә кәрәк. Стакан яртылаш тулымы, әллә яртылаш бушмы - яуапты үҙең һайлайһың. Стакан яртылаш тулы тигән юҫыҡта фекер йөрөткән кеше өсөн тормош та, уны уратып алған мөхит тә икенсе төрлөрәк була. Тышҡы донъя, йәғни беҙҙе уратып алған тирә-яҡтағы мөхит кешенең эске донъяһының сағылышы ғына. Шуға ла ҡайҙандыр бәхет, шатлыҡлы тойғолар эҙләп йөрөү кәрәкмәй, улар һәр кешенең эске донъяһында.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һүҙ башында телгә алынған ваҡиғала иһә Остаз уҡыусыһына яуап итеп түбәндәге хикәйәтте һөйләгән. "Борон-борон заманда бөйөк батша матур һарай һалырға бойорған. Был мөғжизәле һарайҙа көҙгөнән генә торған бүлмә лә булған. Бер көндө был бүлмәгә йүгереп эт килеп ингән һәм аптырауынан туҡтап ҡалған: уны төрлө яҡлап эттәр уратып алған. Уларға өрә башлаған эт үҙенең тауышынан тағы ла нығыраҡ ҡурҡҡан һәм эттәргә ташланған. Эт үҙенең сағылыштары менән алыша торғас, һәләк булған. "Бына күрәһеңме, - тигән Остаз - донъя беҙгә яҡшылыҡ та, яуызлыҡ та алып килмәй. Тирә-яғыбыҙҙағы ваҡиғалар беҙҙең уйҙарыбыҙҙың, теләктәребеҙҙең, ҡылыҡтарыбыҙҙың сағылышы ғына. Донъя - ул ҙур көҙгө".**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ *Башҡорттарҙың тимерлектәрен ябыу, уларҙы рөхсәтһеҙ асыуҙы тыйыу, шулай уҡ ихтилалдарҙы баҫтырыуҙа ҡатнашҡан башҡа милләттәргә башҡорттарҙың ерен таратып биреү ҡарала. Ошо юл менән мишәрҙәргә күп ерҙәр эләгә.*

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

**XVIII быуаттың 30-40-сы йылдары башҡорт тарихының бик ҡанлы, бик фажиғәле осоро: властарҙың аңлайышһыҙ сәйәсәте, ғәйепһеҙҙәрҙе ғәйепләү, уларға яуап итеп бер-бер артлы ҡупҡан ихтилалдар, ихтилалдарҙы ҡаты баҫтырыу, башҡорттарҙы тереләй яндырып, ауылдарынан көл генә торғоҙоп ҡалдырған Тевкелев (Тәфтиләү) кеүек мәкерле кешеләрҙең яуызлыктары. Ләкин нимәнән башланып китә был сыуалыштар? Уларҙың эске һәм тышҡы сәбәптәре ниҙә? Рәсәй дәүләтенең башҡорттарға ҡарата сәйәсәтенең үҙенсәлеге нимәлә? Был һорауҙарға яуапты тарих фәндәре кандидаты, БДУ доценты Марат Миңлеғәле улы ЗӨЛҠӘРНӘЕВ сығышында табырһығыҙ.**



# ИХТИЛАЛДАРҒА...

## мәжбүр иткән сәбәптәр

### 1736 йылдың 11 февраль указы

Хәлде киҫкенләштергән сәбәптәрҙең береһе 1736 йылдың 11 февралендә ҡабул ителгән указ була. Указ Кириллов һәм башҡорт ихтилалдарын баҫтырыуҙа әүҙем ҡатнашҡан Румянцев тарафынан тәҡдим ителә. Был ҡарар XVIII-XIX быуат дауамында үҙ көсөндә була һәм күп проблемалар тыуҙыра. Указға ярашлы, башҡорттар үҙаллылығын юғалта. Әгәр ҙә быға тиклем улар йыйындар йыйып, властарға тура мөрәжәғәт итһә, ер мәсьәләләрен, мәсет төҙөүҙе үҙҙәре хәл итһә, хәҙер быны эшләй алмайҙар. Йыйындар, мәсеттәр төҙөү, муллалар ҡуйыу тик администрация рөхсәте менән генә үткәрелә ала. Ә был үҙидаралыкты тулыһынса юҡҡа сығара. Ҡалалар, заводтар төҙөү, тимерлектәрҙе, иҡтисадты үҫтереү буйынса күрһәтмәләр була. Башҡорттарҙың тимерлектәрен ябыу, уларҙы рөхсәтһеҙ асыуҙы тыйыу, шулай уҡ ихтилалдарҙы баҫтырыуҙа ҡатнашҡан башҡа милләттәргә башҡорттарҙың ерен таратып биреү ҡарала. Ошо юл менән мишәрҙәргә күп ерҙәр эләгә. Шулай уҡ ерҙе һатыу рөхсәт ителә. Башҡорт ерҙәрен күпләп дворяндарға һәм һалдаттарға һатыуы башлана. Дворян биләмәләре киңәйә.

Башҡорт халҡы өсөн үтә фажиғәле осор була был. Улар булған һәм булмаған гәйептәре өсөн ҡаты язалана. Архив документтары буйынса, язалау экспедициялары башҡорттарҙың яртыһынан күбен ҡырып сыға. Петр Иванович Рычков та ошо экспедиция составында була. Ул күргәндәрен ҙур тетрәнеү менән яҙа: "...близ тысячи человек с женами и с детьми их во оной деревне перестреляно, и от драгун штыками, а от верных башкирцев и мещеряков копьями переколото. Сверх того сто пять человек забраны были в один амбар и тут огнем сожжены. ...И таким образом вся деревни Сеянтус жители с их женами и с детьми от мала до велика чрез одну ночь огнем и оружием погублены а жилища их в пепел обращено..." Һөйәнтүҙ трагедияһы берәү генә булмай, халыҡты ҡырыуҙың ошо уҡ алымдары башҡа ауылдарҙа ла ҡулланыла. Ихтилалды баҫтырыуҙа, күренеүенсә, рус һалдаттары ғына түгел, ә башҡорттар араһынан рус батшаһының тоғро ярандары ла (мәҫәлән, шул уҡ Таймаҫ Шәимов һәр саҡ батшаға тоғролоҡ һаҡлай), урыҫ булмаған халыҡтар вәкилдәре лә ҡатнаша. Уларға быны өсөн ер бирелә.

Шулай итеп, Кириллов, Тевкелев кеүек кешеләр арҡаһында эш бик ҙурға китә, башҡорттар ҡанға батырыла. Ихтилал башланғас та, Татищев, экспедицияны туҡтатырға кәрәк, тип тәҡдим итә итеүгә. Сенатта ла Кирилловҡа ҡаршы сығыусылар, экспедицияны туҡтатырға, Башҡортостанда ихтилалдың оҙаҡҡа һуҙылыуына юл ҡуймаҫҡа кәрәк, тип әйтеүселәр була. Сөнки рус-төрөк һуғышы бара. Кириллов берәүҙе лә тыңламай. Етмәһә, уның ҡарашын яҡлаған кешеләр ҙә табыла. Мәҫәлән, Кириллов министр Бирон йөҙөндә яҡлау таба, уға өҙләкһеҙ хәбәр ебәреп тора. Хаттарының йөкмәткеһе түбәндәгенә ҡайтып ҡала: "Беҙҙең экспедицияны ҡайтармағыҙ, ҡаланы төҙөп бөтһәк, ул беҙгә байлыҡ килтерәсәк, беҙҙең ҡаҙнаны байытасаҡ, сабыр итегеҙ, бында бөтәһе лә яҡшы. Ихтилал бөтә Башҡортостанды яулап алмаған. Беҙгә бер-ике кеше генә ҡаршы сыға...". Бына шундай дөрөҫлөккә тап килмәгән мәғлүмәттәр ебәрә Кириллов Үҙәккә. Кириллов башлаған сәйәсәт һуңынан Иван Иванович Неплюев ваҡытында тағы ла әүҙемерәк тормошҡа ашырыла.

Дәүләттең, батшабикәнең башҡорттарҙы ҡырырға тигән бойороғо булмай. Фажиғәне урындағы властың, Кириллов, Тевкелев кеүек кешеләрҙең башбаштаҡлығы, булған проблемаларҙы күрһәтмәүе, мәғлүмәтте боҙоп күрһәтеүе, булған фажиғәне йәшереүе тыуҙыра. Уларҙың Петербургтағы дәүләт эшмәкәрҙәрен ялған мәғлүмәт менән туйындырыуы, Үҙәктең аныҡ мәғлүмәт алмауы хәлде ҡатмарлаштыра. Бер кешенең йәки кешеләр төркөмөнөң дыуамаллығы арҡаһында, бар дәүләтте геноцидта ғәйепләп булмай.

### Һығымталар

Башҡорттар үҙ хоҡуҡтарын яҡлау юлында ҙур юғалтыуҙар кисерә. Ысынында, башҡорттар ихтилалға күтәрелергә, баштарын утҡа тығырға мәжбүр ителә. Улар үҙҙәренең аҫабалығын, властың үҙаллылығын, законды һаҡлар өсөн көрәшкә сыға. Сөнки урында идара иткән дәүләт эшмәкәрҙәре башҡорттарҙың Рус дәүләтенә ҡушылған осорҙағы килешеү шарттарын асыҡтан-асыҡ боҙа башлай. "Беҙ килешеүҙең үҙебеҙ яғынан эшләргә тейеш талаптарҙы үтәйбеҙ. Походтарҙа ҡатнашабыҙ, яһаҡ түләйбеҙ. Беҙҙең бер ғәйебебеҙ ҙә юҡ", ти башҡорттар. Ихтилалдар законлылыҡты һаҡлап ҡалыу өсөн күтәрелә (хәҙерге телдә әйткәндә, Конституцион хоҡуҡтарҙы һаҡлау өсөн - **Авт.**)

Башҡорттар шулай ҙа ниндәйҙер кимәлдә үҙаллылығын һаҡлап ҡала. Рус дәүләте лә башҡорттар менән ныҡ даулашмаҫҡа ҡарар итә. Был килешеүсәнлек оҙаҡҡа һуҙылмай, әлбиттә, 1755 йылғы ихтилалға тиклем генә дауам итә. Ҙур золомлоҡтар ҡылған Брагинды үлтереү менән Бөрйән яғында тағы ихтилал ҡабынып китә. Дәүләт варисының башбаштаҡлығы ошондай эҙемтәләргә килтерә. Ә бит бер кем дә Брагинға шундай енәйәттәр эшләргә, кешеләрҙе мәсхәрәләргә һәм язаларға бойороҡ бирмәгән.

Ихтилалдар, уларҙан һуңғы язалауҙарҙан һуң да башҡорттар үҙҙәрен милләт итеп һаҡлап алып ҡала алған. Ҡанлы быуат булыуға ҡарамаҫтан, дөйөм Ватанға ярҙам кәрәк булғанда, башҡорттар ҡасып, боҫоп, үпкәләп ултырмаған, рустар менән бергә яуға күтәрелгән. 1812 йылғы Ватан һуғышын ғына алайыҡ. Башҡорттар атҡа атланып, Башҡортостаныбыҙҙы, Уралды, Рәсәйҙе һаҡларға ташлана. Үҙҙәренә ҡарата күрһәтелгән бар ғәҙелһеҙлектәрҙе онота. Һеҙ беҙҙе хаҡһыҙға ҡырҙығыҙ, тип тормай. Улар һәр саҡ биргән анттарына тоғро ҡала. Башҡорт халҡының асыҡлығы, эскерһеҙлеге, ихласлығы сағыла был ваҡиғаларҙа.

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ яҙып алды.**

**(Аҙағы. Башы 44-45-се һандарҙа).**

*ҺҮҘ АРАҺЫНДА*

# БАШҠОРТ ДОНЪЯҺЫ...

## рус яҙыусыһы әҫәрҙәрендә

**Ошо көндәрҙә Башҡортостан тураһындағы әҫәрҙәре менән уҡыусыларға яҡшы таныш урыҫ яҙыусыһы Николай Александрович Крашенинниковтың тыуыуына 135 йыл тула.**

Яҙыусы 1878 йылда Соль-Илецк ҡалаһында тыуа. Мәскәүҙә университетта уҡый, оҙаҡ йылдар унда йәшәй, ләкин тыуған яҡтары менән бәйләнеште бер ҡасан да өҙмәй. Ижадында башҡорт халҡының көнкүреше, йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре, фольклоры, тарихы, мәҙәниәте, хоҡуҡһыҙлыҡтан ғибәрәт аяныслы яҙмышы һүрәтләү таба.

"Урман һаҡсыһы" ("Куныр урын") тип аталған тәүге әҫәрендә үк ул башҡорттарҙың көнкүрешенә һәм йолаларына мөрәжәғәт итә. 1907 йылда төбәк халҡының тормошон сағылдырған һәм һигеҙ хикәйә ингән "Һүнә барған Башҡортостан" тип аталған йыйынтығын сығара. Был йыйынтыҡ Рәсәйҙә ҙур танылыу ала. 1936 йылда сыҡҡан "Башҡортостан ҡояшы аҫтында" китабына Башҡортостан, Урал төбәге, башҡорттар хаҡында булған бер романы һәм 17 хикәйәһе индерелә. Ошо темаға арналған һуңғы әҫәре "Яңы ер" очеркы була.

Николай Крашенинниковтың "Әмилә" ("Амелия", 1915) романы уҡыусыларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. Рус әҙәбиәтендә беренсе тапҡыр төп герой булараҡ башҡорт ҡатын-ҡыҙы һүрәтләнә. Романда автор етем ҡыҙ Әмиләнең ҡатмарлы яҙмышы хаҡында бәйән итә.

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Йорт производствоһы

Йөндән таҙартылған һәм тарттырып киптерелгән һыйыр һәм йылҡы тиреһе ыҫтыҡ тип аталған махсус соҡорҙарҙа ыҫланланған. Ыҫтыҡ та ике өлөштән: ыҫтыҡ һәм ут яндырыла торған соҡорҙан торған. Был ике өлөштө улаҡ тоташтырып тора. Тире ике аҙна ыҫланған, бынан һуң уның һыу үткәрмәүсәнлеге арткан. Ыҫтыҡтар башлыса тире һауыт-һаба яһау өсөн ҡулланылған. Бындай һауыттарҙы сей тиренән тегеп, кәрәкле форма килеп сыҡһын өсөн көл тултырғандар һәм киптергәндәр. Һауыт кипкәс, көлдө ҡағып төшөргәндәр һәм тағы ла елдә яҡшылап киптергәндәр. Бынан һуң ыҫлаҡта ыҫлап, ат ялы менән ныҡлап тегеп ҡуйғандар.

Һауыт-һаба тегеү өсөн йылҡы тиреһенең бөтөн өлөшө лә ҡулланылған. Ҡымыҙ өсөн тәғәйенләнгән һаба тиренең ҡәүҙә өлөшөнән алынған. Ул ҙур ғына булған һәм 8 биҙрәнән ашыу ҡымыҙҙы һыйҙырған. Тиренең ошо уҡ өлөшөнән көрәгә тегелгән, ҡымыҙҙы табынға көрәгәлә биргәндәр (һүрәт). Баш тиреһенән башкүнәк яһағандар, унда шулай уҡ ҡымыҙ һалынған. Ҡалған һауыттар ҡымыҙ йөрөтөү өсөн ҡулланылған.



Алғы аяҡтар тиреһенән ҡуллыҡ, ҡулас, муртай, артҡы аяҡ тиреһенән ботлоҡ, дөмбәй тегелгән (һүрәт *а, б, е* - ҡуллыҡ һәм муртай, *в, г* - башкүнәк, *д* - турһыҡ, *ж, з* - ботлоҡ һәм дөмбәй). XIX быуаттың



уртаһында ҡайһы бер хайуандарҙың тиреһен тотошлай ҡулланып, һауыт яһағандар. Мәҫәлән, быҙау тиреһенән яһалған һауыт турһыҡ тип аталған. Көрәгә һәм башкүнәктең формаһы бер үк, тик уларҙың беренсеһе икенсеһенә ҡарағанда ҙур булған. Күсеп йөрөгәндә был һауыттарҙың ауыҙы йомарланған үлән менән ҡаплап ҡуйылған. Яңы ғына яһалған һауыттарҙы төтөн тәме бөтһөн өсөн әсегән һөт ҡойоп, ултыртып ҡуйғандар. Тире һауыттар башлыса ҡымыҙ өсөн ҡулланылған һәм XX быуаттың башында ул Урал арьяғы ҡатайҙары, ҡара-барын-табындар, күбәләк-теләүҙәр, тамъянтүңгәүер, бөрйән, тамъян һәм көньяҡ үҫәргәндәрҙә күберәк осраған.

Һауыт-һабанан тыш, тиренән артмаҡ, ат сбруйы, аяҡ кейеме, юл муҡсаһы беркетелгән ҡайыштар - ҡалта, ҡалтырға һәм башҡа әйберҙәр яһалған. Уларҙы тегеү өсөн ат ялы ҡулланылған, ялдан шулай уҡ арҡан ишкәндәр.

башҡорт теле

# МИН БАШҠОРТ

**Күптән түгел Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультеты егерме йыллыҡ юбилейын билдәләне. Юбилей тантанаһына килгән төрөк ғалимы, филология фәндәре докторы Исмәт Бинәргә университеттың "Почетлы профессоры" исеме бирелде. Исмәт Бинәр башҡорт филологияһы факультетының беренсе сығарылыш студенты, бөгөнгө көндә Истанбул университетының Евразия институты директоры урынбаҫары вазифаһын биләй. Инде бер нисә йыл Төркиәнең төп уҡыу йорттарының береһендә башҡорт телен уҡыта. Халҡыбыҙҙы, телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе яратҡан, хөрмәт иткән кеше. Был хаҡта редакциябыҙ ҡунағы Исмәт БИНӘР үҙе һөйләй.**

## Башҡортостанға килеүебеҙ

90-сы йылдарҙа Төркиәлә сит илдәргә сығып уҡыу ҙур популярлыҡ яуланы. Тап ошо ваҡытта Рәсәй "ишектәре" лә асылды. Беҙ, бер төркөм төрөк йәштәре, Башҡортостанға юлландыҡ. Урыҫ телен дә, башҡорт телен дә белмәй инек ул ваҡытта. Өфөнөң Ленин урамында урынлашҡан китап магазинында төрөк-рус һүҙлеге эҙләп йөрөйбөҙ. Телде белмәүебеҙ арҡаһында һатыусынан ни тип һорарға ла белмәйбеҙ. Һатыусының "Не понимаю вас" тигәнен ишетепме, эргәбеҙгә бер апай килде лә, "Мин төрөксә беләм", тине. Таныштыҡ. Институтта уҡытыуы хаҡында әйтте. Беҙҙе үҙе уҡытҡан уҡыу йортона телде өйрәнергә саҡырҙы. Был апай Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙы Хисамитдинова ине.

Шул осорҙа Башҡорт дәүләт педагогия институтында башҡорт филологияһы факультеты асылды. Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙы унда декан итеп тәғәйенләнде. Мин тәүге студенттар сафында унда уҡырға индем. Бик хуш мөхиткә эләктек. Студенттар беҙгә хөрмәт менән ҡараны, уҡытыусылар беҙҙе яратты. Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙы беҙгә бар яҡлап ярҙам итте, ҡурсалап йөрөнө. Ул беҙгә шул тиклем яҡын кешегә әйләнде. Беҙ уға "Фирҙәүес апай" тип өндәшә инек. Шул уҡ ваҡытта ул беҙгә талапсан да булды. Өлгәшә алмай башлаһаҡ, "Һеҙ төрөк халҡының ғорурлығы булырға тейешһегеҙ, ә һеҙ төрөк халҡын оятҡа ҡалдыраһығыҙ", тип әрләп тә ала ине.

Башҡортостанды үҙемдең тыуған илем һымаҡ ҡабул иттем мин. Әле лә бына Өфө аэропортына килеп төшкәс, Төркиәгә бөтөнләй ҡайтмағанмын, был ерҙәрҙән, халыҡтан айырылмағанмын кеүек хистәр биләп алды. Эйе, халыҡ менән яҡындан танышып, аралашып, республика буйлап күп йөрөнөк. Аҙналар буйы башҡорт мөхитендә йәшәгән саҡтар булды. Ошолай аралашып уҡыуыбыҙ арҡаһында телде тиҙ өйрәндек. Театрға, концерттарға йөрөнөк, төрлө сараларҙа башҡорт, төрөк телдәрендә йырлай торғайныҡ. Институтты тамамлағас, күпмелер ваҡыт бында эшләнем, бизнес менән дә шөғөлләндем, Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәгендә Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында аспирантурала уҡыным. Башҡорт һәм төрөк мәҡәл-әйтемдәре буйынса диссертация яҡланым. Бөгөн Төркиәнең 120 меңдән ашыу студент уҡыған иң ҙур университетында эшләйем.

## Бар нәмәһен биргән халыҡ

Беҙ Башҡортостанда халыҡ менән яҡшы аралашып йәшәнек. Беҙ уларға хөрмәт менән ҡараныҡ, уларҙан да шундай уҡ яуап алдыҡ. Кешенең ниндәй булыуы уның күршеһе менән мөнәсәбәттәрҙә сағыла бит инде. Йәшәгән фатирыбыҙҙа йортташ күршеләребеҙ яҡшы булды. Ауырып киткәндә беҙҙе больницаларға йөрөттөләр, аш бешереп ашата торғайнылар. Шулай яҡындан аралашҡас, беҙ үҙебеҙ йәшәгән фатирыбыҙҙың ишеген биклəмәйенсә уҡырға китә торғайныҡ, сөнки ишегебеҙҙе бикләһәк, күршеләребеҙгә ышанмайбыҙ кеүек тойола ине. Бер ваҡыт күрше фатирҙа йәшәгән апай быны күреп ҡалды ла, "Ниңә ишегегеҙҙе бикләмәй йөрөһөгөҙ?" ти. "Оят бит", тибеҙ. "Һеҙгә оят, башҡаларға оят түгел бит", тине апай.

Икенсе күршебеҙ урыҫ әбейе булды. Бер ваҡыт ул ауырып китте. Беҙ уға хәлебеҙҙән килгәнсә ярҙам иттек. Бер аҙ арыуланғас, "Өс балам бар, береһе лә ҡарамай. Өс бүлмәле фатирымды үҙләштерҙеләр ҙә, мине ошо бер бүлмәле фатирға алып килеп тыҡтылар. Фатирымды биргәс, ҡарарҙар тип уйлағайным", тип әсенеп һөйләне лә, илап ебәрҙе. Уның һөйләгәндәре беҙҙең аңға, менталитетҡа һыймаған нәмәләр ине. Беҙҙең, бөтөнләй ят кешеләрҙең ярҙамын ул оло яҙмыш бүләге итеп ҡабул итте.

Юҡ, Башҡортостанда булған йылдарҙың бер генә минуты ла бушҡа үтмәне. Ул йылдар хаҡында һис үкенесем юҡ. Минең менән бергә уҡырға килгән башҡа төрөк егеттәренең дә береһе лә үкенмәй. Башҡортостанда уҡыған төрөк студенттары менән бөгөн дә Төркиәлә бергә йыйылышып торабыҙ. Йыйылышыбыҙҙы "Башҡорт ҡоролтайы" тип атайбыҙ. Башҡортостан хаҡында һөйләшәбеҙ, унда булған йылдарҙы хәтеребеҙгә төшөрәбеҙ.

Зәки Вәлидиҙең ҡыҙы Иҫәнбикә апай менән бер күрешкәндә ул шулай тип һорай ҡуйҙы: "Исмәт, һин нишләп башҡорт халҡын шул тиклем яратаһың? Бына мин дә башҡорт, минең атайым да башҡорт, ләкин миндә һиндәге кеүек үк тойғолар юҡ һымаҡ". "Иҫәнбикә апай, бына беҙ, төрөктәр, яратҡан дуҫыбыҙ, туғаныбыҙға бөтөн булған әйберебеҙҙе, ризығыбыҙҙы бүлеп бирәбеҙ, шулаймы? Ә башҡорттар бүлешмәй", тинем. Иҫәнбикә апай аптырап китте: "Нишләп бүлешмәһендәр, ти..." "Эйе, башҡорттар әйбере, ризығы менән бүлешеп тормай, улар уны һиңә тулыһынса бирә лә ҡуя", тигәйнем, Иҫәнбикә апай илап ебәрҙе. Минең һүҙҙәремдә һис шаштырыу юҡ, ысынлап та шулай булды. Ҡайҙа ғына ҡунаҡҡа барһаҡ та, өҫтәл тулы ризыҡ ҡаршы ала торғайны. Ул заманда халыҡ артыҡ яҡшы йәшәмәне. Ләкин ҡунаҡ килгәндә бер нәмәһен дә йәлләмәне. Үҙҙәре көндәлек тормошта ашамаған ризыҡтарҙы ла өҫтәлгә ҡуялар ине. Ауылдарҙа ла, ҡалаларҙа ла, иң бай кешегә барғанда ла, иң ярлы кешегә барғанда ла ошо хәлде күрҙек, ошо иғтибарға шаһит булдыҡ. Һеҙ йылы яҡтарҙан килгәнһегеҙ, беҙҙә өшөмәгеҙ, тип йылы ойоҡтар, бәйәләйҙәр бүләк итә торғайнылар. Дәүләкәнгә Рәсимә исемле уҡытыусы апайға ҡунаҡҡа барҙыҡ. Иртән йоҡонан торғас, ул ҡомған менән йылы һыу алып килде. Мин үҙем Төркиәнең Эрузрум ҡалаһынанмын. Беҙҙә лә ҡышын һыуыҡ. Иртәнсәк йыуынғанда әсәйем дә миңә йылы һыу алып килә торғайны. Рәсимә апайҙың был ҡылығы әсәйемде хәтерләтте. Һағыш менән бергә күңелгә йылылыҡ бәрелде. Эйе, хөрмәт йөҙөнән "Әсәй" тип өндәшкән кешеләр ҙә булды. Шул мәлдәрҙе нисек итеп онотаһың!

Эйе, башҡорт халҡына беҙҙең мөхәббәт эскерһеҙ булды. Беҙҙең халыҡтар араһында рухи күперҙәр күптән һалынған, бәлки, өҙөлмәгәндер ҙә. Ошо күперҙәр, юлдар "төҙөкләндерелергә" тейеш. Үҙебеҙҙе яҡшы яҡтан танытып, башҡаларҙы яҡшы яҡтан танып йәшәгәндә, мөнәсәбәттәр тағы ла нығыясаҡ, беҙҙең араларҙа эскерһеҙ мөхәббәт хасил буласаҡ. Төркиәлә ҡайһы берәүҙәрҙең аңын-тоңон аңламайынса: "Эй, йөрөйһөгөҙ шунда араҡы ултыртылған өҫтәлдәрҙә ашанып, әрәм-шәрәм эштәр менән мәшғүл булып..." - тигәндәре лә булды. Юҡ, ҡайҙа ғына йөрөһәк тә беҙ үҙебеҙҙең ҡиммәттәребеҙҙән ситләшмәнек. Ләкин кеше ниндәй генә мөнәсәбәт күрһәтмәһен, уны хөрмәт иттек. Ҡунаҡ икәнебеҙҙе онотманыҡ, хужаларға ихтирам менән ҡараныҡ. Башҡортостанда йәшәгәндә бер кеше: "Бына, Исмәт, телде, мәҙәниәтте өйрәндегеҙ, ләкин араҡы эсергә өйрәнмәнегеҙ", - тип өндәште бер саҡ. Уға: "Беҙ уның өсөн килмәнек. Бер кем дә беҙҙең ауыҙға көсләп ҡойманы", - тинем. Ысынлап та, был донъяла һәр кем үҙе теләгән өлөштө ала.

Бер аҡыл эйәһе "Күңелеңдә һәр кеше ултырырлыҡ урын эшлә", тип әйтә. Йәғни, һәр кешене ҡабул итә белергә кәрәк. Ултырһын ул һинең күңелеңдәге урында, шунда ҡаласаҡмы, әллә оҡшатмай китәсәкме, был уның үҙенән тора. Тормошто шулай ҡабул итергә тейешбеҙ, тип уйлайым.

## Халыҡ үҙгәрмәне, беҙ үҙгәрҙек

Беҙ Башҡортостанға белем алыр, һөнәр үҙләштерер өсөн килдек. Һуңғараҡ Төркиәнән төҙөүселәр, башҡа өлкәлә эшләүсе милләттәштәребеҙ ҙә килде. Улар үҙҙәренең фиғел-ҡылыҡтары менән беҙҙән ҡырҡа айырыла ине. Шуға ла улар килгәндән һуң беҙгә, юғары уҡыу йорттарында уҡып йөрөүсе төрөк йәштәренә ҡарата бер аҙ мөнәсәбәт үҙгәргәндәй булды. Бер ваҡыт Фирҙәүес апайға: "Һеҙҙең халыҡ үҙгәрә башланы, беҙгә икенсе төрлө ҡарайҙар, элек улай түгел ине", - тинем. "Исмәт, беҙҙең халыҡ үҙгәрмәне. Һеҙ үҙгәрҙегеҙ. Һеҙҙең үҙгәреү арҡаһында халыҡтың ҡарашы ла үҙгәрҙе. Сөнки һеҙҙең менән килеүселәр араһында тәмәке тартҡан кеше лә юҡ ине. Беҙҙең халыҡ, йәштәр һеҙҙе өлгө итеп алды", - тине.

*Башҡортостанда уҡыған төрөк студенттары менән бөгөн дә Төркиәлә бергә йыйылышып торабыҙ. Йыйылышыбыҙҙы "Башҡорт ҡоролтайы" тип атайбыҙ. Башҡортостан хаҡында һөйләшәбеҙ, унда булған йылдарҙы хәтеребеҙгә төшөрәбеҙ. Зәки Вәлидиҙең ҡыҙы Иҫәнбикә апай менән бер күрешкәндә ул шулай тип һорай ҡуйҙы: "Исмәт, һин нишләп башҡорт халҡын шул тиклем яратаһың? Бына мин дә башҡорт, минең атайым да башҡорт, ләкин миндә һиндәге кеүек үк тойғолар юҡ һымаҡ". "Иҫәнбикә апай, бына беҙ, төрөктәр, яратҡан дуҫыбыҙ, туғаныбыҙға бөтөн булған әйберебеҙҙе, ризығыбыҙҙы бүлеп бирәбеҙ, шулаймы? Ә башҡорттар бүлешмәй", тинем. Иҫәнбикә апай аптырап китте: "Нишләп бүлешмәһендәр, ти..." "Эйе, башҡорттар әйбере, ризығы менән бүлешеп тормай, улар уны һиңә тулыһынса бирә лә ҡуя", тигәйнем, Иҫәнбикә апай илап ебәрҙе.*

Мине бер саҡ радиоға интервью алырға саҡырҙылар. Алып барыусы: "Һинең турала, Исмәт, мин бер ҙә насар уйламайым. Әммә бер табында осрашҡан төрөктәрҙе күреп, аптырап торам әле..."- тине. Баҡтиһәң, улар бер ҡунаҡхананың ашханаһында ниндәйҙер байрам үткәргәндәр. Хөрмәт йөҙөнән шунда йәшәгән төрөк төҙөүселәрен табындарына саҡырғандар. Уларға икенсе өҫтәлгә араҡыһыҙ, хәрәм итһеҙ, мосолманса өҫтәл әҙерләгәндәр. Тегеләр иһә: "Ниңә беҙгә айырым өҫтәл әҙерләнегеҙ, беҙҙән араҡығыҙҙы йәлләйһегеҙме әллә?"- тип һуҡрана башлағандар. Шулай эсеп алып, үҙҙәренең бар насар яҡтарын күрһәткәндәр. Ошо ваҡиғаға шаһит булған алып барыусы: "Һеҙҙә лә ундай кешеләр бармы ни?"- тип һорап ҡуйҙы. Эйе, урындағы халыҡ беҙҙе, уҡырға килгән йәш төрөктәрҙе, араҡы эсмәгән, тәмәке тартмаған, насар һүҙ һөйләмәгән кешеләр итеп ҡабул итте. Ә эш буйынса килгән төрөктәр араһында араҡыһын да эскән, тәмәкеһен дә тартҡан, башҡа бысраҡ эштәр менән дә шөғөлләнгән кешеләр булды. Һәр милләттең яҡшылары ла, насарҙары ла була шул инде. Ә беҙ яҡшы өлгө биреүебеҙ менән абруй яуланыҡ бындағы халыҡ араһында.

Бер уҡыусыға ҡунаҡҡа барҙыҡ. Ата-әсәһе бик ныҡ әҙерләнеп ҡаршыланы беҙҙе. Өҫтәлгә иң яҡшы ризыҡтар, милли аштар ҡуйылған, шунда уҡ шешәбаш та ҡунаҡлаған. Уҡыусыбыҙ аш табыны әҙерләнгән залға алдараҡ үтеп, өҫтәлде күҙҙән үткәрҙе лә, тиҙ генә беҙҙе икенсе бүлмәгә алып инеп, шунда көтөп ултырып торорға ҡушты. Һуңынан залға саҡырҙылар. Өҫтәлдәге теге шешәбикә юҡҡа сыҡҡайны. Табынға ултырып, ашай башлағас, уҡыусыбыҙҙың әсәһе Гүзәл апай илай-илай беҙгә рәхмәттәрен уҡыны: "Эй, Хоҙайым, минең доғаларыма яуап бирҙең. Мин Унан көн-төн, улым яҡшы кешеләр араһында йөрөһөн, араҡы кеүек бысраҡлыҡтарҙан азат булһын, тип һорайым. Ул минең теләктәремде ҡабул ҡылды, мең шөкөр", -тине.

## Бер тел белгән - бер кеше, утыҙ тел белгән...

Төркиәнән Өфөгә самолетта осоп килгәндә бер кеше менән аралашырға тура килде. Милли телдәр хаҡында һүҙ сыҡты. Ул юл буйы башҡорт теле, уны уҡытыуҙың әһәмиәте хаҡында тылҡыны. Мин: "Әйҙә һуң улай булғас башҡортса аралашыйыҡ", - тинем. Ул аптырап китте һәм: "Мин башҡортмон, ләкин башҡортса белмәйем", - тине. Нисек итеп кеше үҙ туған телен белмәйенсә, уны пропагандалай ала? Беренсе өлгө - кеше үҙе. Үҙең туған телеңдә һөйләшмәй тороп, башҡаларҙы уны өйрәнергә өгөтләп буламы? Матур итеп ғаиләңдә башҡортса һөйләш, туғандарың, таныштарың, балаларың менән туған телеңдә аралаш. Әгәр һәр кем ошо ябай ғына ҡағиҙәне үтәһә, яңғырауыҡлы лозунгтарҙың кәрәге лә ҡалмай. Үҙ мөхитеңдә, үҙ ғаиләңдә, хатта урамда туған телеңдә аралашыуҙы бер кем дә тыймай бит.

***✓ Төрөк теле менән башҡорт телен белеүем арҡаһында төрки тел төркөмөнә ҡараған бөтә телдәрҙе аңлайым, аралашам. Шуға эш буйынса анкета тултырған-да "Ниндәй телдәрҙе беләһегеҙ?" тигән графаға утыҙлаған телде яҙып ҡуям.***

# ТЕЛЕН КҮТӘРӘМ,

## мине күтәрә…

Ике йыл элек Ҡырғыҙстанда төркиәт буйынса ғилми конгресс үтте. Ҡырғыҙстандан бер профессор өс телдә - рус, ҡырғыҙ һәм төрөк телдәрендә сығыш яһаны ла, сығышының аҙағында: "Бына мин һеҙҙең телдә һөйләшәм, әйҙәгеҙ, берегеҙ булһа ла беҙҙең телдә өндәшегеҙ", - тип Төркиә ғалимдарына саҡырыу ташланы. Беҙҙекеләр аптырап ҡалды. Ошо ваҡытта минең докладыма сират еткәйне. Сығышымды башҡорт телендә яһаным. Ҡырғыҙ профессоры: "Һеҙ өйрәнеүгә иң ауыр булған төрки телдәренең береһен һайлағанһығыҙ, рәхмәт!" - тине һәм һоҡланыуын белдерҙе. Ә Төркиәнән килгән ғалимдар, шаяртып: "Һин беҙҙең намыҫты ҡотҡарҙың", - тинеләр.

Төркиәт буйынса ғилми конференция-конгрестарҙа ҡатнашырға саҡырыу алһам, мин унда мотлаҡ башҡорт телендә сығыш яһайым. Октябрь башында Истанбул университетында конгресс үтте. Унда 50-нән ашыу илдән 900 ғалим ҡатнашты. Секция етәксеһенә: "Минең ғилми эшем башҡорт теле хаҡында булғас, башҡорт телендә сығыш яһарға теләр инем", - тинем. Рөхсәт иттеләр. Сығышымды тамамлағас, ҡаҙаҡ профессорҙары: "Беҙ һеҙ һөйләгәнденң бөтәһен дә аңланыҡ, төрөк ғалимының беҙҙең телдә һөйләүе (башҡорт теле ҡаҙаҡ теленә яҡын булғанға шулай тигәндәрҙер инде) бик ҡыуандырҙы", - тип күтәрмәләп ебәрҙеләр.

Бына шулай, туған телеңде лә бел, шул уҡ ваҡытта сит телдәрҙе лә өйрән. Үҙем башҡорт теленән башҡа, рус телен дә яҡшы беләм. Ғөмүмән, башҡорт телен ныҡлап өйрәнәйем тиһәң, рус телен белмәйенсә булмай. Сөнки күп фәнни хеҙмәттәр рус телендә яҙылған. Фирҙәүес апай Хисаметдинова гел генә: "Һин ғалим буласаҡһың, рус телен өйрәнергә тейешһең", - ти торғайны. Ысынлап та, был телде өйрәнеүҙең дә файҙаһы тейҙе. Мин Башҡортостандан киткәс, күпмелер ваҡыт Польшала йәшәнем. Поляк теленең рус теленә оҡшашлығы бар, әлбиттә. Ләкин уның үҙенсәлектәрен аңлар өсөн өс ай тирәһе курстарға йөрөнөм, поляк телендә иркен һөйләшә башланым. Поляктар: "Нисек беҙҙең телде улай тиҙ өйрәндең?" - тип аптыраны хатта. Рус телен яҡшы белеү ярҙам итте инде миңә поляк телен дә үҙләштереүгә. Ә рус һәм поляк телдәрен яҡшы белгәс, мин славян тел төркөмөнә ҡараған башҡа телдәрҙе лә беләм. Ә төрөк теле менән башҡорт телен белеүем арҡаһында төрки тел төркөмөнә ҡараған бөтә телдәрҙе аңлайым, аралашам. Шуға эш буйынса анкета тултырғанда "Ниндәй телдәрҙе беләһегеҙ?" тигән графаға утыҙлаған телде яҙып ҡуям.

Башҡортостандан Төркиәгә ҡайтҡас, бер аҙ эшкә урынлашмай йөрөнөм. Күпмелер ваҡыттан Литваға саҡырыу алдым. Ундағы университетта төркиәт бүлеге асырға йыйыналар ине. Мин саҡырыуға ризалаштым һәм Литваға йүнәлдем. Университет администрацияһы минең менән ниндәй телдә аралашырға белмәйенсә, аптырап торған булған. Улар төрөк телен белмәй, мин литва телен белмәйем. "Рус телен беләһегеҙме?" тип һорайым. Яңыраҡ ҡына СССР-ҙан айырылғандарына күрә, рус телен онотоп бөтөрмәгәйнеләр әле. Онотҡандары ла яйлап рус телен хәтерҙәренә төшөрҙөләр.

Шул ваҡытта төрөк студенттары Эразмус программаһы буйынса уҡырға Литваға уҡырға килде. Уҡытылырға тейешле дәрестәр араһында "Сағыштырмаса грамматика" тигән фән дә бар ине. Нимә уҡытырға белмәйенсә, уҡытыусылар миңә мөрәжәғәт итте. Программала фәндең дөйөм атамаһы бар, ләкин уның ниндәй телдәге сағыштырмаса грамматика булырға тейешлеге хаҡында бер нимә әйтелмәгән. Мин студенттарыбыҙҙың Төркиәлә рус төркөмөндә уҡығаны тураһында хәбәрҙар инем. Шуға ла мин төрөк-урыҫ телдәренең сағыштырмаса грамматикаһын уҡытырға тәҡдим иттем һәм Литвала төрөк студенттарына рус телен өйрәтә башланым. Миңә: "Был дәрес беҙҙең программала юҡ, һеҙгә эш хаҡы түләй алмайбыҙ", - тинеләр. Милләттәш студенттарға файҙа, үҙемә тәжрибә булыр, тип, бушлай уҡытырға ризалаштым. Бер семестр тирәһе уҡытҡандан һуң, бухгалтерияға саҡыртып алдылар. "Ни өсөн аҡсағыҙҙы алмайһығыҙ?" тиҙәр. Баҡтиһәң, Евросоюздың программаһы булғанға күрә, аҡсаны ла Евросоюз түләй икән. Уйламаған ерҙә ҡәҙимге эш хаҡымдан һигеҙ тапҡырға күберәк аҡса алдым. Телдәрҙе белеүҙең матди яҡтан да файҙаһы ҙур икәнен раҫланы инде был хәл.



***Башҡорт телен тәүге йылда аспиранттарға өйрәттем. Дөйөм төрки телдәре хаҡында һөйләнем, шунан ҡыпсаҡ төркөмөн ҡараныҡ та, ҡалған дәрестәрҙе "Был телде белһәгеҙ, ҡалған төрки телдәрҙе аңлаясаҡһығыҙ", тип, башҡорт теленә күсерҙем. Әлеге ваҡытта бер аспирантым төрөк һәм башҡорт морфологияһы буйынса диссертация яҙа. Бынан тыш, магистрҙарым бар. Улар әлеге ваҡытта Динис Бүләковтың төрөк теленә әйләндерелгән (ҡәрҙәш телдәрҙә тәржемә юҡ, тип иҫәпләйем, шуға әйләндерелгән, тип әйтәм) ике китабы буйынса диссертация яҙалар. Шулай ҙа уҡыусыларымдың төп өлөшөн бакалаврҙар тәшкил итә. 40-лап студентым был уҡыу йылы башынан башҡорт телен өйрәнә башланы. Ҡыҫҡа ғына арала башҡорт телен яратып өлгөрҙөләр.***

## Истанбул университетындағы эшем

Дәрестәремде башҡорт йырҙарын, ҡурай моңон тыңлатып башлап ебәрәм. Был төрөк студенттарына башҡорт мәҙәниәтенә ылығырға, дәрескә иғтибар, ҡыҙыҡһыныу уятырға булышлыҡ итә. Ә үҙем башҡорт йырҙарын тыңлаһам, ҡурай моңон ишетһәм, Башҡортостанды уйлап, унда үткәргән йылдарымды хәтергә төшөрөп, тулҡынланып китәм.

Истанбул университетының филология факультетында егермәнән ашыу бүлек бар. Һәр бүлек бындағы факультет ҡәҙәре, тиһәм, хата булмаҫ. Мин төрки телдәре бүлегендә "Современные тюркские языки" тигән дисциплинаны алып барам. Шулай уҡ Евразия бүлегенә лә башҡорт һәм урыҫ телдәрен индерҙек. Унда башҡорт теле дәрестәрен алып барам.

Башҡорт телен тәүге йылда аспиранттарға өйрәттем. Дөйөм төрки телдәре хаҡында һөйләнем, шунан ҡыпсаҡ төркөмөн ҡараныҡ та, ҡалған дәрестәрҙе "Был телде белһәгеҙ, ҡалған төрки телдәрҙе аңлаясаҡһығыҙ", тип, башҡорт теленә күсерҙем. Әлеге ваҡытта бер аспирантым төрөк һәм башҡорт морфологияһы буйынса диссертация яҙа. Бынан тыш, магистрҙарым бар. Улар әлеге ваҡытта Динис Бүләковтың төрөк теленә әйләндерелгән (ҡәрҙәш телдәрҙә тәржемә юҡ, тип иҫәпләйем, шуға әйләндерелгән, тип әйтәм) ике китабы буйынса диссертация яҙалар. Шулай ҙа уҡыусыларымдың төп өлөшөн бакалаврҙар тәшкил итә. 40-лап студентым был уҡыу йылы башынан башҡорт телен өйрәнә башланы. Ҡыҫҡа ғына арала башҡорт телен яратып өлгөрҙөләр. Бында килер алдынан:"Бер аҙнаға Башҡортостанға китәм, дәрестәр ҡалмаһын өсөн уны ял көнө үткәрәм", - тинем. Беҙҙә студенттарға уҡырға йөрөү мәжбүри түгел, шулай ҙа дәрескә һәммәһе лә килде - был күп нәмә хаҡында һөйләй, тип уйлайым. Өйгә бирелгән эште иң яҡшы эшләүсегә Башҡортостандан бүләк алып ҡайтырға, һәр береһенә ҡалаҡлап башҡорт балы ашатырға вәғәҙә иттем. Дәрестәрҙе бар яҡлап төрләндерергә тырышам. Шаярышып, көлөшөп алабыҙ. Башҡорт йырҙарын, моңдарын тыңлайбыҙ.

Әлеге ваҡытта ентекләп фән менән шөғөлләнәм. Башҡорт грамматикаһы буйынса китап әҙерләйем. Университет был китапты әҙерләүҙә бар яҡлап ярҙам күрһәтә, кәрәк булған барлыҡ нәмәне үҙебеҙҙең уҡыу йорто аҡсаһына һатып алам. Фән менән ныҡлап шөғөлләнгәнгә күрә, күп йөрөп булмай. Шулай ҙа төркиәт буйынса конференцияларҙа ҡатнашып ҡалырға тырышам. Сөнки уларҙың әһәмиәте бик ҙур. Конференция ваҡытында үҙ эшмәкәрлегеңә баһа алаһың, тәжрибә уртаҡлашаһың, артабан хеҙмәт итер өсөн йүнәлештәр күҙаллайһың.

Беҙҙә ғалимдар үҙҙәрен фатир, автомобиль менән тәьмин итә алырлыҡ эш хаҡы ала. Сит илдә аспирантурала уҡыған, докторлыҡ яҡлаған, эшләгән уҡытыусыларға өҫтөнлөк бирелә. Мин әле эшләгән университетта эшкә ҡабул итеүҙең төп талаптарының береһе - сит илдә ярты йыл булһа ла эш тәжрибәһе булырға тейеш. Сит илдә тәжрибәң булмаһа, ниндәй генә яҡшы мөғәллим булма, эшкә алмауҙары ихтимал. Был йәһәттән миңә бер ниндәй ҡыйынлыҡтар юҡ.

Төркиәнең мәғариф өлкәһе лә һуңғы йылдарҙа ҡайһы бер ҡыйынлыҡтар кисерә. Министрҙарҙың бер-бер артлы алмашыныуы эҙмә-эҙлекле эшләү мөмкинлеге бирмәй. Яңы килгән министр барыһын да үҙгәртергә тотона, һөҙөмтәлә мәғариф бер урында тапанып тик тора. Рәсәй мәғарифы мин уҡыған йылдарҙа (15-20 йыл элек) яҡшы ғына ине. Бында практика күберәк булды. Хәҙер хәлдәр нисек икәнен белмәгәнгә күрә, Төркиә мәғарифы менән сағыштырып булмай. Шулай ҙа бер нәмәгә иғтибар иттем: сит ил граждандарына рус телен өйрәтеү йүнәлешендә Рәсәй әүҙем эшләй. Хатта сит ил граждандарына рус телен өйрәтеү буйынса уҡыу әсбаптары эшләгән университет та бар.

## Әхмәтзәки Вәлиди хаҡында бер кәлимә

Әхмәтзәки Вәлиди бөйөк кеше булған. Әлеге ваҡытта уның хеҙмәттәре, фекерҙәре әллә күпме ғалимдарҙың иғтибарын, өйрәнеүен көтә. Ул ғүмер буйы Башҡортостанға ҡайтыу теләге менән йәшәгән. Хатта Төркиәлә ул үҙенә өй ҙә һатып алмаған. Ҡатыны, балалары, ул вафат булғас ҡына, йорт һатып алғандар.

Әхмәтзәки Вәлидиҙең Башҡортостан автономияһы өсөн көрәш юлы, революцион ҡараштары башҡорт халҡына таныш. Төрөктәр уны күберәк фән әһеле, бөйөк ғалим булараҡ белә. Беҙҙә уның дингә ҡарашы хаҡында төрлө фекерҙәр йөрөй. Ҡайһы берәүҙәр уны, дингә ҡаршы булған, тип тә раҫларға маташа. Был дөрөҫ түгел. Ул төрөктәрҙе лә Ҡөрьән ҡағиҙәләре менән йәшәргә саҡырған. Барығыҙға ла билдәле "Башҡорт халҡына хушлашыу хаты"нда ла башҡорттарҙы динде һәм телде һаҡлауға ғәйәт көс һалырға саҡырған бит. Фән донъяһына башкөллө сумғандан һуң да дингә ҡарашы үҙгәрмәгәндер. Ул осорҙа Төркиәлә лә ислам дине өсөн ауыр ваҡыттар була. Бер ваҡыт Әхмәтзәки Вәлидиҙең студенты, бөгөнгө көндә Төркиәләге билдәле профессор менән осраштым. Иҫәнбикә ханым да бар ине. Мин ул профессорҙан Әхмәтзәки Вәлидиҙең дингә ҡарашы хаҡында һораштым. Профессор Әхмәтзәки Вәлидиҙең төшөндә Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе күреүе, дини, иманлы кешеләр менән даими рәүештә аралашыуы хаҡында һөйләне. Иҫәнбикә апай "Был турала атайым беҙгә лә әйтмәй торғайны бит" тип, аптырап китте хатта. "Заманалар ҡатмарлы булғанға күрә, һеҙҙең именлегегеҙ өсөн үҙе иҫән саҡта был турала һөйләмәүҙе һорағайны", тине ғалимдың студенты. Эйе, Әхмәтзәки Вәлиди Төркиәлә сәйәсмән булараҡ түгел, ғалим булараҡ билдәле. Ләкин ғилем менән шөғөлләнгәндә лә ул үҙ хәҡиҡәтенән алыҫ китмәҫкә тырышҡан, Ататөрк менән мөнәсәбәттәренең насарланып китеүенең сәбәптәре лә ана шул башҡорттарға хас туралығында булған.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Төрөк-башҡорт ғалимы Исмәт Бинәр менән был һөйләшеү башҡорт телендә үтте. Ул башҡорт телендә күп башҡорттарҙан яҡшыраҡ һөйләшә һәм: "Мин башҡорт телен күтәрәм, башҡорт теле мине күтәрә", - тип ҡабатларға ярата. "Башҡортостанда уҡып, белем алып, телде үҙләштереп, Төркиәгә ҡайттым, һаман да башҡортса һөйләйем, башҡортса йәшәйем. Ситтә, сит милләттәр араһында йәшәйем, тип, башҡорттар үҙҙәре лә туған телен онотмаһын ине", тигән теләк тә белдерә төрөк-башҡорт ғалимы. Уның миҫалы милләттәштәргә телһөйәрлек өлгөһө булып, уның әйткәндәре йөрәктәргә үтеп инһә ине.**

Азамат САЛАУАТОВ
яҙып алды.

***✓ Бүлеккә йәш табибә-психолог килде. Үҙенә килешеп торған медицина костюмы кейгән. Бер аҙ тулҡынланып торған ҡара сәсле, ҡара ҡашлы был ханымды Сабит Хәкимович шундуҡ таныны. Уның элекке студенты - "Ҡараҡас" та баһа!***





Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ

# Мәк сәскәһе

(Хикәйә)

– Гөлгөнә, - тине ул ишектән инеү менән ярайһы ғына асыулы итеп, кейемен сисә-сисә, - минең ни өсөн оҙаҡлағанымды беләһеңме?

- Юҡ, ҡайҙан беләйем мин?

- Прокуратурала!

- Прокуратурала?..

- Эйе, тап шунда! Ә ни өсөн, беләһеңме?

- ...

- Ифрат та дөрөҫ, минең операция яһаған пациенттарымдан ришүәт алып йөрөгәнең өсөн... Минең исемдән!.. - Сабит ҡыҙғандан-ҡыҙа барҙы. - Нисек ҡулың барҙы ауырыу кешеләрҙән аҡса алырға? Ҡайҙа һинең намыҫың? Әллә бер ҡасан да булманымы?..

- Юҡ, Сабитка, мин...

- Ниндәй аҡсаға машиналарыңды күлдәк һымаҡ алыштыраһың, әйт, зинһар?..

- Әсәйем...

- Етте! - Сабит хәләл ефетенең йылҡылдап торған затлы халатынан нык ҡына итеп тотоп, елтерәтеп алып килеп, диванға ултыртты. - Һөйләмә миңә башҡа әкиәттәренде! Беләһеңме, минең абруйыға балта сапҡаныңды? - ҡатынына эйелә биреп, ярһығандан-ярһый барҙы. - Ярай, минең репутация... Черт с ней! Үҙеңдең башың төрмәгә китәсәк бит! Әле прокуратураға өс кенә кеше яҙған. Әммә бер башлаһаҡ, улар минең барлыҡ пациенттарымды "аҫтын өскә әйләндерәсәк". Аҡсаны нисек иркен тотоноуыңа ҡарағанда, һин ришүәт алған кешеләрҙең һаны күпкә күберәк, әлбиттә!..

Бер ҡасан да былдай уҡ асыулы булмаған Сабит, сисенеп ташлап, ванна бүлмәһенә инде һәм һалҡын һыу менән ҡойоноорға тотондо...

Душтан сыҡҡас, ҡатынына башҡаса бер ни ҙә өндәшеп тормаҫтан, йоҡо бүлмәһенә инде лә, гөрһөлдәп, карауатҡа йөҙ түбән ауҙы. Ғәрлегенән ни эшләргә лә белмәй ине ул. Гөлгөнәһе лә уны борсоманы. Һәр төрлө уйҙарға башы буталған Сабит күпмелер ваҡыттан һуң онотолоп, ойоп киткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды...

...Сибек кенә янған ҡыҙғылт төҫтәге төнгө лампаның яҡтылығы төшкән йоҡо бүлмәһендә ишетелер-ишетелмәҫ кенә уйнаған сәйер көйгә күҙҙәрен асты. Тәүҙәрәк, төш күрәмдер, тип уйлай биреп тә ҡуйҙы. Әммә ошо ярым ҡараңғылыҡта, уның янында өҫтөндә кейем заты булмаған Гөлгөнәһе нәфис тәндәре менән уға тейгеләй-тейгеләй, гүзәлдәрҙән гүзәл һыны менән йылан һымаҡ борғолана ине.

- Сабит, мин һине үҙ йәнемдән артыҡ күреп яратам, - тип шыбырланы ҡатыны ҡолағына. - Һинһеҙ йәшәй алмайым... Ал, мине...

Тәүҙәрәк әлеге прокуратуралағы допростар һаман ҡолағында сынлап торған Сабит икенсе яғына әйләнеп ятырға иткәйне, әммә ул әйләнеүгә Гөлгөнәһе тағы уның ҡаршыһында ине инде... Ул бер туктауһыҙ иренең ҡолағына береһенән береһе яғымлы, "корос иретерҙәй эҫе" һүҙҙәр шыбырланы. Утыҙ өсөнсө йәш менән барған, көс-ғәйрәте ташып торған ир, әлбиттә, тимер түгел...

- Мине төрмәгә ябырға ирек ҡуймаҫың бит, йәнем?.. - тип шыбырланы ҡатын таңға яҡын. - Мин ҡурҡам... Зинһар өсөн, йәнем, бирмә мине уларҙың ҡулына. Ғүмерем буйы ҡолоң булырға ризамын, йәнем...

Ир заты артабан ирене. Домна мейесендәге металдай, бөтөнләйгә һынын юғалтып, иреп аҡты...

Яҡындары, дуҫтары ғына түгел, хатта прокуратура хеҙмәткәрҙәре лә гәжәпләнде Сабит Хәкимовичтың был ҡылығына.

- Доктор, - тине уны яҡларға тәғәйенләнгән адвокат, - ни эшең был? Һинең бер ғәйебең дә юҡлығын хатта баш прокурор үҙе белә лә баһа! Ни өсөн ҡатыныңдың ғәйебен үҙ өҫтөңә алаһың? Төрмә курорт түгел икәне үҙеңә лә мәғлүмдер бит?..

- Юҡ, гражданин адвокат, ришүәт алырға ҡатыныма үҙем ҡуштым. Ул тик минең бойороҡтарымды ғына үтәүсе. Шулай тип яҙығыҙ документҡа. Судта ла тап ана шулай тип әйтәсәкмен...

Йәш тәфтишсе ярайһы ғына нығыш булып сыҡты. Уның тырышлығы менән тәүҙә ялыу яҙып биргән өсәүҙән тыш, Гөлгөнәнең тағы әллә күпме кешенән ришүәт алғанлығы фашланды. Әммә, алдан килешеп ҡуйған буйынса, ул үҙе лә, ире лә "бер ауыҙлы - бер һүҙле" булғанға күрә, суд Сабитты күпмелер ваҡытҡа иркенән мәхрүм итергә ҡарар сығарҙы. Ә "тик табиб бойороғон ғына үтәп йөрөргә мәжбүр булған шәфҡәт туташы" Гөлгөнәне ғәйепһеҙ тип таптылар...

* * *

"Новичокты аҡылға ултыртып алыу" тотҡондар араһында ғәҙәти хәл. Ҡайһы берәүҙәр шундай теләк менән янһалар ҙа, уның абруйлы хирург икәнлеге тиҙ генә төрмә эсенә таралды. Ҙурыраҡ "стаж"лы башҡалар менән бер рәттән, Сабитты ла ярайһы ғына тиҙ арала үҙҙәренсә хөрмәт итә башланылар. "Доктор - он и в Африке доктор", тине оло ғына йәштәге бер "авторитет". Айырыуса, етди йөрәк сире менән яфаланған бер тотҡондоң сираттағы амнистияға эләгеүенә булышлыҡ иткән докторға "хирург" тип кенә өндәшә башланылар. Йыш ҡына төрмә больницаһына операцияларға саҡырыуҙарын да яҡшы беләләр...

Баш ҡаланан әллә ни алыҫ булмаған "зона"ға Гөлгөнәһе тәү осорҙарҙа йыш килгеләне. Ул алып килгән һәр төрлө тәм-том, әлбиттә, башҡа тотҡондар менән бергәләп ашалды. Төрмәлә шундай гәҙел йола бар. Ауылда тороуына ҡарамаҫтан, әсәһе Зөлхизә апай ҙа унда-бында булһа ла килеп етергә ваҡыт таба. Тик һуңғы ярты йыл тирәһе Гөлгөнәһе, ни өсөндөр, килеүен һирәкләтте. Элегерәк "яратам", "һағындым" тигән ялҡынлы хаттары менән күмә ине, әммә тора-бара ундай "мөхәббәтле" хәбәрҙәр һиҙелерлек кенә һирәгәйә барып, быны инде ике ай тирәһе бөтөнләйгә килгәне юҡ. Дауаханала төнгө дежурҙарға йөрөгән һөйөклөһө эштән бушай алмайҙыр, йә иһә нык ҡына арыйҙыр инде. Бөгөн яҙмаһа ла, бәлки, иртәгә яҙыр, тип, Сабит ҡатынынан хат алыуҙан өмөтөн өҙмәне. Йә, үкенескә, кеҫә телефоны тоторға рөхсәт итмәйҙәр. Һөйләшеп торорҙар ине, исмаһам...

Ә әсәһе Зөлхизә апай бер хәлдән һуң килененең өйөнә башҡаса аяҡ баҫмаҫ булды. Ул көндө, Сабитына китеп барышлай, баш ҡалаға һуғылып китергә булды. Бәлки, уның аша берәй нәмә биреп ебәрер, тигән уй менән килененең өйөнә килгәйне. Ишектә ҡоҙағыйы асты. Килене өйҙә юҡ ине. Ҡоро ғына иҫәнләштеләр. Ауылдан дүрт-биш сәғәтлек юлдан арып килгән Зөлхизә апайға сәй эсергә лә тәҡдим итмәне Ольга Николаевна.

- Сабитка китеп бара инем. Бәлки, килендән биреп ебәрә торған нәмәһе лә барҙыр, тип ингәйнем. Улдары Сәлимдең фотокарточкаларын да күрһәтергә алып килдем...

- Какой Салим еще? Беренсенән, беҙҙең ейәнебеҙ Сәлим түгел, ә - Славик, Вячеслав! Ә икенсенән, сколько можно его кормить, твоего дармоеда? - тип һалды кинәт Ольга Николаевна. - И вообще, тюремщиктың әсәһе менән беҙҙең арала уртаҡлыҡ юҡ!.. - Ә инде өс-дүрт йылдай күрмәгән ейәненең фотоларына ары-бире күҙ йөрөтөп кенә сыҡты ла, бер ни ҙә өндәшмәне. "Сей башҡорт" йөҙлө ейәнен күргеһе килмәгәне һиҙелеп тора ине.

Шул саҡ үҙенең аҫҡысы менән ишекте асып, өйгә Гөлгөнә килеп инде. Ольга Николаевнаның ярайһы ғына юғары тонда һөйләшкән сағыу тауышын ишетеп тә өлгөргә булһа кәрәк. Эштең ниҙә икәненә тиҙ төшөндө ул. Иҫәнләшкәндән һуң өҫ кейемен сисә-сисә, әсәһенә:

- Ну, мам, енәйәтсе булһа ла, минең ирем бит ул, ҡыҙма инде... Ана, һыуытҡыста апельсин, алма кеүек нәмәләр етерлек. Һалып биреп ебәрәйем, барыусы булғанда. Үҙем ҡасан барам әле...- тине.

Гөлгөнә, ҡәйнәһе алдында алсағыраҡ булып күренергә тырышты, әммә Сабитын яҡлап, үҙенең әсәһенә бер ни ҙә өндәшмәүҙе хуп күрҙе...

Әлбиттә, ни өсөн төрмәгә эләгеүенең ысын сәбәбен Сабит әсәһенә әйтмәгәйне шул. Уның алдында ла "үҙ ғәйебен таныны". Ата-әсәһе, туғандары тарафынан үҙенең Гөлгөнәһенә һүҙ тейгеҙҙермәҫ бит инде. Шуға күрәләр ҙә, улының адресына төбәлеп әйтелгән былдай ауыр һүҙҙәрҙе Зөлхизә апай "йоторға" мәжбүр булды. Гөлгөнә лә үҙенең әсәһенән ысынбарлыҡты йәшергәндер шул...

Килен йортона инеп сығыуы, унда ҡоҙағыйы менән ни һөйләшеүҙәре хаҡында күрешеүгә килгән әсәһе, әлбиттә, улына һөйләп бирҙе. Әммә шул хәлдән һуң да улы әсәһенә иң мөһим серҙе сисмәне. Сөнки килене өсөн улы төрмәлә интеккәнен белеп ҡалған ата-әсәһенең Гөлгөнәһенә ҡарата нәфрәте уяныуынан ҡурҡты ул. Бер ҡасан "ултырыу" срогы тулыр, үҙенең "мәк сәскәһе"нең янына ҡабаттан ҡайтыр... Барыһы ла онотолор... Бәхетле итеп йәшәй ҙә башларҙар... Үлеп һағынды ул Гөлгөнәһен... Татлы төштәр күрә-күрә, Сабит "подъем" алдынан ғына йоҡоға китте.

* * *

Амнистия иғлан ителеп, төрмә начальнигының "Срогынан ярты йыл алдараҡ азат итергә..." тигән ҡарарын көтмәгәйне лә Сабит. Ата-әсәһе, Гөлгөнәһе лә белмәне был хаҡта. Көтмәгәндә өйөнә ҡайтып төшөп, шундай "сюрприз" менән ҡатынын шатландырырға булды Сабит. Сығыр алдынан байтаҡ ҡына аҡса ла бирҙеләр. Хатта һөйөклөһөнә бүләккә алтын һырға алырға ла етте.

Баш ҡалаға төн уртаһы ауышҡас ҡына килеп етә торған киске поезға ултырҙы. Иртәгәһе көнгә ҡалырға ла булыр ине, әммә йәш ҡатынын тиҙерәк күреү теләге менән янған ирҙең түҙемлеге етмәне. Килеп төшкәс тә, тимер юл вокзалынан дауахананың Гөлгөнә эшләгән бүлегенә шылтыратып, уның бөгөн ял көнө икәнен белеште. Такси ялдап, туп-тура өйөнә ҡайтты. Үҙенең аҫҡысы менән шым ғына ишекте асты... Әммә... Сабитҡа үтә лә таныш, баҙлап ҡына янған ҡыҙыл төҫтәге лампа менән ярым яҡтыртылған йоҡо бүлмәһенән асыҡ ишегенән Гөлгөнәһенең, һәм тағы бер ир затының гөрләшкән тауыштарын ишетеп, шаңҡып туктап ҡалды...

... Алдан хәбәр итмәйенсә, ҡатыны янына ҡайтып төшөүенә үкенергә лә, үкенмәскә лә белмәй, шәп-шәп атлап буш урам буйлап атланы ул. Ҡайһы йүнәлештә барһа ла барыбер һымаҡ ине уға. Шундай ныҡ тетрәнеүҙән башы ни уйларға ла белмәне. Әммә бер ҡәтғи ҡарарға килде: башҡаса был өйгә бер ваҡытта ла аяҡ баҫмаҫҡа! Ишек төбөнә килеп, уның аяҡ аҫтына йығылып, илай-илай ятып ҡалған ярым шәрә Гөлгөнәһе һаман күҙ алдында торҙо. "Китмә инде, йәнем, бәгрем, мөхәббәтем!.." тип тағы ниҙер әйтеп ялбарған ҡатынының һүҙҙәре уға ерәнес булып тойолдо хатта. Бер ваҡыт "Мине төрмәгә ябырға ирек ҡуймаҫың бит, бәгрем... Ғүмерем буйы ҡолоң булырға ризамын, йәнем..." тип ялбарған Гөлгөнәһенең үҙенә хыянат итеүен ғәфү итә алманы ул. Ҡасандыр уны һушынан яҙҙырған "сәскәләрҙең дә сәскәһе" ошо мәлдә таҙдарын ҡойған мәктәң орлоҡ биҫтәһен генә хәтерләтте...

* * *

Хикәйә ошоноң менән тамамланырға ла тейеш ине. Әммә хөрмәтле уҡыусыларымдың бик күптәре бының менән ҡәнәғәт булмаясағын күҙаллап, уларҙың ятып өлгөргән геройы Сабит менән артабан ни булғанын бер аҙ ғына һөйләп китмәк булдым. Ярайһы йәш булыуына ҡарамаҫтан, тормош усағында бешеп, бер аҙ нужа ҡаласы кимереп өлгөргән, сикә сәстәренә ваҡытынан алдараҡ "кырау" ҡуна башлаған Сабиттың артабанғы яҙмышына, әлбиттә, битараф булып ҡалыусылар юҡтыр...

Улының ваҡытынан алда азат ителеп сығыуына Хәким ағай менән Зөлхизә апайҙың шатлыҡтарының иге-сиге булманы. Инде етенсе йәш менән барған кескәй Сәлим тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Үҙенә әллә нисә төрлө матур-матур уйынсыҡтар алып ҡайтҡан атаһының алдынан да төшмәй, тиерлек. Беҙ ҡапсыҡта ятмағандай, хәләл ефетенең ғәйебен үҙ өҫтөнә алыуы арҡаһында иркенән мәхрүм ителеүе хаҡында Сабиттың ата-әсәһе лә, коллегалары ла хәбәрҙар ине. Шуға күрә ул үҙенә ҡарата һәр ерҙә яҡшы мөнәсәбәт тойҙо. Элекке һөнәре буйынса яңынан эшкә урынлашты. Тик башҡа дауаханаға. Ҡан тамырҙары хирургияһы бүлегенең өлкән ординатор вазифаһына ҡуйҙылар уны. "Алтын ҡуллы" хирургтар һәр ҡайҙа ла кәрәк. Тәүге эшләгән ерене лә саҡыралар ине. Әммә башҡаса Гөлгөнә төнгө дежурға йөрөгән больницаға барырға күңеле тартманы. Дөрөҫөрәк итеп әйткәндә, ҡурҡты. Инде утыҙ дүрт йәшен тултырған, бер аҙ зиндан һурпаһын һемергән Сабитҡа, әлбиттә, буйҙаҡ тормошҡа күнәһе лә юҡ. Дауахананың дөйөм ятағынан бүлмә лә бирҙеләр. Яңы урында тиҙ генә үҙләшеп, элеккесә эшләп алды ла китте. Иң мөһиме - ул хәҙер тыныс. Күңелең тыныслығында ятҡан шөғөлөң менән булыуы үҙе бер бәхет бит ул.

Көндәрҙән бер көндө операцияға тәғәйенләнгән сираттағы пациентка консультация үткәрергә тип, бүлеккә йәш табибә-психолог килде. Үҙенә бик тә килешеп торған зәңгәр төҫтәге медицина костюмы кейгән. Бер аҙ тулҡынланып торған ҡара сәсле, ҡыйғаҡ ҡара ҡашлы был ханымды Сабит Хәкимович шундуҡ таныны. Уның элекке студенты - "Ҡараҡас" та баһа! Бер нисә йыл элек Гөлгөнәнең тыуған көнөнә килгәйне бит ул.

- Һаумыһығыҙ, Сабит Хәкимович! - тине "Ҡараҡас" тулҡынланып.

- Һаумыһығыҙ, - тине яҙышып ултырған Сабит. - Ә мин һеҙҙе беләм бит...

Сабит тағы серле күҙҙәр менән осраштырарға. Шул уҡ мөхәббәтле ҡараш... Әммә был сибәркәй үҙенең иғтибарын Сабиттан тиҙ генә айырып алды ла, күрше өҫтәл артына ултырып, ауырыу тарихына низер яҙа башланы. Алдында ултырған был һылыуға ҡарап, Сабит Хәкимович һәр төрлө күңел хистәренә, өмөтләнеү ҡатыш икеләнеүле уйҙарына бирелде. Ятҡан йыры тағы ҡолаҡ төбөндә сыңлағандай булды.

*...Ул сәсәкте өҙөп ҡарар өсөн*
*Әҙләп туғайҙарға барма һин.*
*Һин эҙләмә, уның үҙ йөрәге*
*Янар сәсәк булып ҡабынһын...*

Бер ваҡыт ошо йырҙы йырлаған сағында үҙенә шундай һағышлы итеп баҡҡан ине бит был муйыл күҙҙәр, Сабит. Һуңыраҡ та был ҡараш менән осрашҡылағайны. Тик... ул саҡта һинең күңел күҙҙәрең уны күрмәне. Сөнки күңелеңдә башҡа сәскә арбағайны. Бөтөнләйгә башҡа төр сәскә... Ә хәҙер һуңлағанһыңдыр инде. Бәлки, ҡасандыр был һылыуҡайҙың йөрәге ысынлап та һинә ҡарата "янар сәсәк булып ҡабынған" да булғандыр... Тик хәҙер уның йөрәгендә һинең өсөн урын бармы икән?.. Ә бәлки, ул бер ҡасан да ҡабынмағандыр, тик һинә шулай тойолған ғыналыр. Ә шулай ҙа... һинең ысын бәхетең, бер ҡасан да шиңмәҫ "янар сәсәгең", бәлки, ошолор?.. Ҡайһылайыраҡ итеп белергә?.. Оҙаҡ уйланырға әллә ни ваҡытың да ҡалмағандыр бит инде, Сабит. Хәҙер уҡ, һис кисекмәҫтән йөрәгеңдә асып һал һин был сибәркәйгә! Ошонан да уңай башҡа ваҡыт таба алмаясаҡһың һин! Бәлки, һинә Аллаһ фәҡәт бөгөнгә көн уны алдыңа килтереп ҡуйғандыр. Оҙаҡ икеләнмә! Был бүлмәлә һеҙ икәүҙән башҡа бер кем дә юҡ!

- Фирүзә Таһировна... - ниһайәт, Сабит бүлмәләге тынлыҡты боҙҙо. Тамаҡ ҡырып алды.

- Тыңлайым, Сабит Хәкимович, - ҡыҙ күтәрелеп уға ҡараны.

- Фирүзә!.. - ҡыҙҙың исемен ни өсөндөр икенсе тапҡыр ҡабатлаған Сабит тағы тукталды. Артабан ни әйтерен бөтөнләйгә онотто, булһа кәрәк.

- "Әле булһа яңғыҙһыңмы?" тип һорамаҡсы булаһығыҙмы, Сабит Хәкимович? - тине яҙыуынан айырылып, һағыш тулы күҙҙәре менән уға баҡҡан Фирүзә көтмәгәндә. Әллә психолог булараҡ, әллә ни, үҙе лә һиҙмәй ҡалды ул нисек ошо һүҙҙәрҙе әйткәнен.

Быуа һинә - мә! Ун дүрт-ун биш йәшлек малайҙай, бөтөнләйгә ҡаушап төштө "көслө зат". "Тап шулай, Фирүзә", тип әйтеү урынына, ни өсөндөр, был ғүзәл заттан тағы низер ишетерен көттө. Тегеһе оҙаҡ көттөрмәне, үҙенең һорауына үҙе үк яуап бирҙе.

- Яңғыҙмын, Сабит Хәкимович. Һаман да яңғыҙмын... Һеҙ ҙә һуңламанығыҙ...

Сабит инде бөтөнләйгә "телен йотто".

- Ғәфү итегеҙ, зинһар өсөн, - башлаған фекерен артабан дауам иткән ҡыҙҙың күҙҙәре йәшләнде. - Әммә...

- Бер ни ҙә өндәшмә, Фирүзә, - Сабит, ахырҙа, телгә килде. Ҡыҙҙың алдына уҡ килеп баҫты ла, бер аҙ әйләә бирел, уның биттәрен сылатып тәгәрәп барған йәш тамсыларын баш бармаҡтарының ҡырыйы менән һыпырып алды. - Башҡа бер ни ҙә өндәшмә... Һинең алдыңда мең мәртәбә гәйепләмен... Тик минең...

- Һеҙҙең Гөлгөнә менән бәхетһеҙлеккә осрауығыҙҙы бик яҡшы беләм, Сабит Хәкимович, - күҙҙәрен һаман Сабиттан алмаған Фирүзә уны бүлдерҙе. - Был хаҡта һөйләмәһәгеҙ ҙә була. Минең ҡарашымды аңлағанығыҙ өсөн мең-мең рәхмәт!.. Ошондай осрашыу, һөйләшеү бер ҡасан беҙҙең арала буласағына ышандым мин...

- Сәсәкләрҙең дә сәскәһе - һин, Фирүзә!..

(Аҙағы).

ИЖАДХАНА

**Башҡортостандың халыҡ артисы, Шәйехзада Бабич исемендәге дәүләт премияһы, Халыҡ-ара, Рәсәй һәм Башҡортостан конкурстары һәм фестивалдәре лауреаты Вәхит Хыҙыров хаҡында һүҙ сыҡҡанда күптәрҙең йөҙөндә ирәүән йылмайыу хасил була. Әлбиттә, былдай кәйеф торошо Вәхиттең күңелдәргә үтеп инерлек итеп йырлауынан, тормошто һөйөүенән, донъяға оптимизм менән ҡарауынан, юморға бай булыуынан, кешеләргә итәғәтле һәм ярҙамсыл булыуынан килә. Ул бөгөндән сәхнәгә сығып, пародия, сатира-юмор, көлкөлө һүҙ жанрҙары буйынса сығыш яһаһа ла, ҙур уңышҡа өлгәшә алыр ине. Вәхиттең тағы ла бер һәләте барлығына инандыҡ: ул етди, барыбыҙҙы ла борсоған көнүҙәк проблемалар хаҡында ла еңелсә юмор, семетке сатира менән әңгәмә ҡора белә. Вәхит үҙе әйтеүенсә, был сифатты ул атаһы Ғәлибай Хыҙыровтан алған. Хәйер, түбәндәге монологта һеҙ йырсының был һәләтенә үҙегеҙ инанырһығыҙ.**



# ШУЛ ЯҠТАРҒА ҠАРАП БЕР ЙЫРЛАНЫМ...

## Уйҙарымды алыҫҡа ла ебәреп

### Фанераға йырламайым

Бер концертта Ғәзиз Дәүләтбирҙиндең Рауил Бикбаев шиғырына яҙылған бер йырын плюсҡа йырларға тура килде барыбер ҙә. Ни өсөн тигәндә, йырҙың һүҙҙәрен дә ятлап өлгөрмәгәйнем, етмәһә, концертты телевидение төшөрә. Шул саҡта, валлаһи, ер тишегә булһа, оялышымдан шунда инеп китер инем. Профессиональ йырсыға урамда, стадионда температура +17 градустан түбән булһа, ҡөтги рәүештә йырларға рөхсәт ителмәй. Берҙә йырлайым, тип, ғүмер буйы йырламай йөрөргәме? Шуға күрә халыҡ күп йыйылған, ел һыҙғырып уйнаған асыҡ һауала майҙандарҙа фанераға йырлау мөмкиндер. Тик концерт залдарында плюсҡа йырлауға килгәндә, был хәлде бары тамашасыны алдау тип кенә баһалар инем. Һинең концертыңа аҡса түләп килгән тамашасыны алдау үҙ-үҙеңде алдарға тырышыу ҙа. Әммә фанера менән тамашасының йөрәген алдап булмайҙыр ул. Минең ҡайны ваҡыт ике бүлектә 25-30 йыр булып китә, ысын күңелдән, ихластан, хәлем бөткәнсе йырлауҙан үҙемә оло кинәнес табам. Уның ҡарауы, концерттан таҙа намыҫ менән килеп сығаһың. Фонограммалы концерттың энергетикаһы булмай. Бында ике төрлө алдау килеп сыға: берҙән, йырсы тамашасыны алдай, икенсенән, мин моңло йыр тыңлап ултырам, тип, тамашасы ла үҙ-үҙен алдарға мәжбүр.

### Зауыҡһыҙлыҡ

Йыш ҡына йырсылар үҙ концертында: "Тыуған ауылым тураһында, атай-әсәйем тураһында, мөхәббәтем тураһында йырлап алайым әле, һағындым мин уларҙы", - тип әйтеп йыр башҡарырға ярата. Уларҙың мөхәббәте мотлаҡ рәүештә бәхетһеҙ, айырылған һөйгән йәр һыңында булыусан. "Нишләп һин мине ташлап киттең?" тип йырлаусыларға: "Ауыҙыңды асып, нимәңде ҡарап ултырҙың һуң?" - тип әйтке килә хатта. Ҡыҫҡаһы, беҙҙең заман йырҙары тематикаһына күҙ һалғанда, Санта-Барбара ял итә. Телевизорҙан, радионан ҡотлауҙарҙа бер туктауһыҙ ҡабатланған атай-әсәй, тыуған ауыл, һағыныу темалары менәрләгән тамашасыларҙы ғына түгел, ҡотланыусыларҙың үҙҙәрен дә ялҡытып бөткәндер инде. Радионан да, телевизорҙан да ҡотлау алдынан бер үк ҡалып текстар уҡыла. Уларҙа тик ҡотлаусылары менән ҡотланыусыларының исемдәре генә үҙгәреп тора. Ҡотлау текстарының барыһында ла тиерлек, башҡортсаһында ла, татарсаһында ла, былы егерме йылдан ашыу ваҡыт ошондай һүҙҙәр ҡабатлана ла ҡабатлана: "Улар, атай-әсәй, беҙгә шунсама балаһын төн йоҡоларын ҡалдырып, бәпләп, иркәләп, наҙлап ҡарап үҫтерҙе, уҡытты, белем бирҙе, кеше итте. Үкенескә ҡаршы, яңыраҡ атайыбыҙ теге донъяларға китеп барҙы, әммә әсәйебеҙ бирешмәне, һаман да тыуған ауылыбыҙҙа беҙҙе көтөүен дауам итә..." Зауыҡһыҙлыҡтың өсөн да ҙурырағы ҡасан беҙҙә булғаны бар ине икән? Ярар, яҡын, ҡәҙерле кешеләрҙе ҡотлау ҙа булһын, ти. Ә нинә ошондай ҡалыпҡа ҡоролған текстарҙы беҙ, башҡа миллионлаған һалым түләүселәр, дәүләт радиоһы һәм телевидениеһы аша тыңларға тейеш һуң?

### Мөғжизә үҙе генә килмәй

Һәр йырсының бер төп йыры булалыр ул. Әлбиттә, мин күп йырҙарҙы башҡарҙым, әммә барыбер ҙә бер йыр хаҡында һүҙ алып барғанда мин уны Салауат Низаметдиновтың Әнисә Таһирова һүҙҙәренә яҙған "Мөғжизәгә килә ышанғым" йыры тип атар инем. Мин уны училищела уҡығанда йыш кенә сағыла башҡарҙым. Йәш булыуыма ҡарамаҫтан, мин уны шундай хис менән йырлағанмындыр, күрәһең, күптәр шул йырымды яҡшы иҫләй һәм концерттарҙа шуны башҡарыуымды үтенә. Әммә күптәрҙең күңеленә ятҡан башҡа йырҙарымды ла кәмләй алмайым. Минә ҡалһа, төп йырым әсәйемә оҡшаған йырымдыр ул. Әсәйем дә ярата "Мөғжизәгә килә ышанғым" йырын.

Мөғжизә, тигәндән, хыялымдағы мөғжизә миҙгелен көтөп кенә йәшәй торған кеше түгелмен. Ғөмүмән, үҙең тотонмаһаң, кешегә ышанып ҡына донъяла бер нәмә лә эшләп булмай. Мөғжизә миҙгеле хеҙмәт, тырышлыҡ менән тыуа. Күптәр йырсылар сәхнәгә сығып, рәхәтләнеп сығыш яһап тик йөрөй был, тип яңылыша. Әҙер йыр менән сәхнәгә сыҡҡансыға тиклем ниндәй хеҙмәт башҡарырға тура килгәнде улар аңларға ла, тыңларға ла теләмәй. Мин йырсының сәхнәгә тиклемге хеҙмәтен шахтерҙыҡы менән тиңләр инем. Ә сәхнәгә сығыу инде тынсыу, ҡараңғы шахтала арып-талып, асығып-һыуһап смена тултырғандан һуң асыҡ һауаға сығып һауа һулау кеүек. Профессиональ йырсылар был хәлде яҡшы аңлай: сәхнә - ул ауыр хеҙмәтеңдең һөҙөмтәһе генә.

### Салауат Низаметдинов феномены

Минә төп йырымды бүләк итеүсе Салауат ағай Низаметдинов яҡты донъяны күреүҙән мәхрүм булһа ла, башҡаларҙың күңел күҙен асырлыҡ йырҙар яҙып ҡалдырҙы. Меңәрләгән йөрәктәрҙе яндырып китеп тә барҙы. Башҡорт музыка сәнғәтендә Салауат Низаметдинов феноменының асылы ла талантында һәм иҫ киткес эшкә һәләтлелегендә булды. Донъяны, матурлыҡты үҙ күҙҙәре менән күреүҙән, һоҡланыуҙан мәхрүм булғангамы, ул үҙенең былдай әмәлен донъяны һәм матурлыҡты тойоу, һиҙеү аша йырға һала ине. Күҙҙәре күрмәһә лә, уның уҡымаған китабы булманы, үҙенең генә түгел, башҡа классик композиторҙарҙың партитураларын ятҡа белде. Ә бына беҙгә, йәғни үҙ күҙебеҙ менән күрергә һәләтлеләргә былдай һиҙемләү, былдай тойғо һәм былдай хәтер бирелмәгән. Салауат ағай тиҫтәләгән мең кешеләрҙе тауышы буйынса, тәүге ижектән үк таный торғайны. Биш йыл һөйләшмәй, күрешмәй торһаң да, телефондан шылтыратып, һүҙ әйтергә лә өлгөрмәйһең, шундуҡ исемде әйтеп һала ине.

Хәҙерге йәштәрҙә бөтөнләй хәтер юҡ. Әллә хәтерҙәре юҡ, әллә барлыҡ белемдәре шул кимәлдә. Үҙемдең бер студентымдан "Кем ул Ленин?" тип һорағайным, ул: "Революционер", - тип яуапланы ла, артабан уның ниндәй кеше булыуы, ниндәй эштәр башҡарыуы хаҡында бер ни әйтә алманы. Ҡыҫҡаһы, уның тарих буйынса бар белгәне лә ошо Ленин ғына булып сыҡты. Артабан мин унан Наполеон менән һуғыштың, Бөйөк Ватан һуғышының ҡасан башланғанын һораным. Бөтөнләй белмәй икән дә. Шиғриәттең, музыкаһың нескәлектәре тураһында бөтөнләй һөйләшергә лә түгел инде уның менән. Была был хәҙерге йәштәрҙең дөйөм уртаса белем кимәле. Совет дәүерен нисек кенә тәнҡитләмәһендәр, ул саҡта төплө белем ала инек.

### Һүҙ моңо

Мондоң башы һүҙҙә. Шағир шиғырын үҙе кисермәйенсә, бөҙрә, ялтырауыҡ һүҙҙәрҙе рифмалап, камил күренгән әҫәр ижад итһә лә, әгәр ҙә кисереше күңеле, йөрәге аша үтмәһә, уға яҙылған йыр ҙа үле килеш тыуыуы бар. Беҙҙең эстраданың иң ҙур өлөшөн тәшкил итә ундай йырҙар. Хәҙер ҡайны бер композиторҙар компьютер артында ултырып ҡына музыка яҙа. Һүҙһеҙ килеш. Нисек инде шиғырға һалынған хис, тойғо, фекер менән тәьсирләнмәйенсә генә йыр яҙмаҡ кәрәк? Был күренеш суррогат әсә аша бала тапҡан һымаҡ килеп сыға инде.

Минең классик йырҙарҙы башҡарырға ынтылышым да хәҙерге эстраданың зауыҡһыҙлығынан киләләр, моғайын. Классик йырҙар, башҡорт халыҡ йырҙары күҙәк үк, ваҡыт һынауын үткән. Миллионлаған күңелдәр аша үтеп һыналған. Башҡорт композиторҙары араһында был йөһәттән хәҙер иң күп башҡарылғаны Заһир Исмәғилевтың, Хөсәйен Әхмәтовтың әҫәрҙәре. Ундай композиторҙарҙың исемдәре бер ҡулдың бармаҡтары саҡлым ғына. Классик, хор әҫәрҙәре баҫылған китаптар, үҙен композитор тип атаусылар эт тубығынан, ә йырларлыҡ әҫәрҙәр генә бик аҙ. Китаптарҙы аҡтараһың, теге йәки был композиторҙың әҫәрен тукталаһың, тик уны йырлап булмай. Бер кемгә лә сер түгел, хәҙер хатта нотаны белмәгән композиторҙар ҙа бар. Һөйләм төҙөй белмәгән яҙыусылар буламы икән? Шул уҡ ваҡытта моңо булмаған Андрей Миронов, Владимир Высоцкий, Марк Бернес, Утесовтар һүҙҙең мәғәнәүи йөкмәткеһен, һүҙ моңон тәрән тойоуҙары арҡаһында йыр сәнғәтендә ҙур уңышҡа өлгәшә. Улар һүҙҙе йырлата белгәндәр, музыкаль тактка тап килтереп, һүҙҙәрҙе әйтеп тороп, тыңлаусының күңелен яулай алған. Ҡайһы бер йырсылар мөңрәп йырлай, һүҙҙәре бөтөнләй юҡ тиерлек. Йөрәге йырламайынса ла үҙҙәре генә йырлағандар бар, улары инде йөрәге йырлағандарға ҡарағанда оҙағыраҡ йәшәй.

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ИРТӘН...

## кешеләр алдашмай

■ Пластик хирург Эмин Устунер раҫлауынса, сәстең ҡойолоп, баштың пеләшләнеүендә гравитация, йәғни бөтөн донъя тартылышы ғәйепле, сөнки кеше сәстәрен тартыу көсө тәьҫире аҫтында юғалта. Табип әйтеүенсә, гравитация һөҙөмтәһендә кешенең баш тиреһе ергә ҡарай тартыла. Йәштәрҙең баш тиреһенең аҫтында ярайһы ғына май ҡатламы бар һәм ул сәс фолликулаларына булған баҫымды кәметә. Әммә олоғайған һайын был ҡатлам кәмей, ә фолликулаларға баҫым көсәйә. Төрөк ғалимының теорияһы буйынса, сәстәр баш тиреһенең ауырлығы тыуҙырған баҫымдан ҡойола һәм баштың түбәһендә барлыҡҡа килгән пеләш яйлап тарала башлай. Ысынында иһә, ир-егеттәрҙең сәсһеҙ ҡалыуында ошо сәбәп күҙәтелә лә инде, тимәк, уның был теорияһында дөрөҫлөк бар.

■ Швеция ғалимдары раҫлауынса, йоҡоһо туймаған кеше энергия запасын юғары калориялы аҙыҡтан алырға мәжбүр була. Йоҡо туймаһа, ҡәнәғәтлек килтерә торған үҙәктәр эшмәкәрлеге боҙола һәм баш мейеһенең аппетит өсөн яуап биргән өлөшөнә үҙенсәлекле сигнал ебәрелә. Һөҙөмтәлә, йоҡоһо туймаған кеше күберәк ашай башлай, етмәһә, ул майлыраҡ һәм татлыраҡ ризыҡтарға өҫтөнлөк бирәсәк.

■ Халыҡ-ара ғүмер тураһындағы институт белгестәре иҫәпләүенсә, Европала йәшәүселәр витамин һәм минералдарҙы тейешле күләмдә алмай. Ғалимдар һигеҙ Европа илендә (Бельгия, Дания, Франция, Германия, Нидерландтар, Польша, Бөйөк Британия һәм Испания) йәшәүсе кешеләрҙең туҡланыу рационында 17 төп микроэлементтың күләмен тикшереп ҡараған. Һөҙөмтәлә, Европа халҡының тимер, кальций, цинк, B1 (тиамин), B2 (рибофлавин), B6 витаминдары һәм фолий кислотаһы етешмәүен асыҡлаған. Эксперттар әйтеүенсә, был витаминдарҙың ҡытлығы организм өсөн артыҡ хәүефле түгел.

■ Иртә менән кешеләр һирәгерәк алдаша, тип иҫәпләй Америка ғалимдары. Тикшеренеүҙәрҙә 20 кеше ҡатнашҡан һәм уларҙың һәр береһе төрлө һорауҙарға яуап бирергә тейеш булған. Иң ҡыҙығы, алдашҡан һайын 10 доллар аҡса түләнгән. Финанс яҡтан ҡыҙыҡһындырыу булһа ла, 8-ҙән 12-гә тиклем барыһы ла тик дөрөҫтө генә һөйләргә тырышҡан. Сәғәт 12 тулғандан һуң картина үҙгәргән, яуап биреүселәрҙең дүрттән өс өлөшө ялған яуаптар бирә башлаған, кискә ҡарай алдаҡсылар һаны тағы ла күбәйгән. Әйткәндәй, күптән раҫланған: дөрөҫлөк һәм ғәҙеллек яратыусылар башҡаларға ҡарағанда һирәгерәк ауырый.

■ Тормошта булған ниндәйҙер уңышһыҙлыҡты даими рәүештә иҫкә төшөрөп тороу насар эҙемтәләргә килтереүе ихтимал. Ливерпуль университеты ғалимдары раҫлауынса, был турала иҫкә төшөрөп, үҙенде "ашаһаң", психикаға зыян килә. 32,8 мең кеше араһында үткәрелгән һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, уңышһыҙлығын онота алмаусылар депрессия һәм башҡа хәүеф тойғоларын кисергән.

АЙЫҒАЙЫҠ, ЙӘМӘҒӘТ!

**Нимә ул алкоголизм: сирме, әллә зарарлы алама ғәҙәтме? Оҙаҡ йылдар буйына алкоголизм мораль-әхлаҡи күҙлектән баһаланып килде, һәм уға алама ғәҙәт, ихтыяр көсһөҙлөгө, тотанаҡһыҙлыҡ тигән ҡараш йәшәне. Илебеҙ халҡының күпселек өлөшө эскелеккә ҡарата шундай мөнәсәбәттә булды һәм әле булһа шундай ҡараштағы кешеләр байтаҡ. Һуңғы 50-60 йыл эсендә генә, ниһайәт, был күренеш дауалауға ауыр бирелә торған, үҙенең сәбәптәре, таралыу һәм үҫешеү "тәртиптәре", эҙемтәләре булған хроник сир тигән танылыу алды. Был сир нимәнән башлана, уның сәбәптәре ниҙә? Ир-егеттәребеҙҙе, ҡатын-ҡыҙҙарҙы һәм бигерәк тә йәш быуынды эскелектән йолоп ҡалыуҙың ниндәй юлдары бар? Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған табибы, медицина фәндәре докторы, профессор Марс Тимербулат улы ЮЛДАШЕВ ошо юҫыҡтағы фекерҙәре менән уртаҡлаша.**



# ХӘМЕР БАШҠА ЛА КИТӘ...

## башҡа ла етә

- Уйлап ҡараһаң, бер кем дә эскесе, алкоголик булам, тигән маҡсат ҡуймай үҙ алдына. Ғәҙәттә, иҫерткес эсемлектәрҙе лә ул-был уйһыҙ ғына төп күтәреп ҡуя. Бөтөн бәлә шунда ла инде: уйһыҙ-ниһеҙ ... Ә ни өсөн кеше спиртлы эсемлектәр ҡуллана һуң? Сөнки бындай продукцияны, йәғни араҡыны, күпме теләйһең - шунса эшләп сығаралар һәм һаталар! Иң көйөнөслө сәбәп шунда: араҡыны күпләп етештереү һәм уны һәр ерҙә һатыу ил иҡтисадына бик тә төшөмлө.

Икенсенән, кешеләрҙең күпселеге эшһеҙлек, төрлө социаль ғәҙелһеҙлек, тормош ауырлашыуы арҡаһында эскелеккә бирелеп китә. Әйткәндәй, һуңғы йылдарҙа ҡатын-ҡыҙҙар күпләп эсеүгә бирелә башланы. Был иһә ғаиләләрҙең тарҡалыуы, ирҙәр һанының кәмеүе арҡаһында килеп сыға. Шуны ла әйтергә кәрәк: диндең халыҡҡа йоғонтоһо кәмене. Ислам дине бит, юғиһә, спиртлы эсемлектәр ҡулланыуҙы тыя, уны ҙур гонаһ тип раҫлай. Унан ҡала йәштәрҙе тәрбиәләү менән шөғөлләнеүсе ойошмаларҙың ( пионер, комсомол һ.б.) бөтөрөлөүе лә йоғонто яһамай ҡалманы, әлбиттә. Ә бит эскелек, тәмәке тартыу,наркотиктар ҡулланыу - быларҙың бөтәһен дә мәктәп йәшендәге балалар башлап ебәрә. Ә ни өсөн эсә һуң йәштәр һәм үҫмерҙәр? Ололарҙың эскәнен күреп, уларға оҡшарға тырышыуҙан башлана был яман ғәҙәткә юл. Ә ҡатын-ҡыҙ нилектән юлыға был сиргә? Улар ҙа ирҙәр менән бергәләп эсеүҙән башлай фажиғәгә юлды. Йәш кенә ҡыҙҙар иһә һәр төрлө компанияларҙа шулай уҡ егеттәренә эйәреп эсә башлай, күптәре тулыһынса улар йоғонтоһона бирелә. Ғәҙәттә, ундай "йыйын"дарҙа эсергә теләмәгәндәрҙе мәжбүр итеп, көсләп эсерәләр. Бындай ҡыҙҙар торабара эскесе ҡатындар йоғонтоһона эләгә һәм "әхирәттәр" бергәләп типтерә башлай. Шулай итеп, эскелек фәҡәт эскелектең генә артыуына килтерә. Даими рәүештә спиртлы эсемлектәр ҡулланыусыларҙың 5-10 проценты хроник алкоголик булып китә.

Халҡыбыҙҙа эскелек күренешен яратмай, уны яманлаған, ғибрәт иткән, фашлаған, унан көлгән бик күп әйтем һәм мәҡәлдәр бар. Мәҫәлән, "Эсһәң хәмер - аҡылың кәмер", "Хәмер башҡа ла китә, башҡа ла етә", "Хәмер һүҙҙе ҡуйырта, фекерҙе шыйығайта", "Хәмер менән күтәрелгән күңел тиҙ китә", "Йөҙ грамм хәмер йөҙ бәләнең башы, "Эсһәң шарап, булырһың харап", "Шешә кеҫәне тишә","Рюмка күтәрелә, абруй төшә", "Айыҡлыҡ - байлыҡҡа, эскелек - хәйерселеккә юл" һ.б. Эскелек, ғөмүмән, башҡорт халҡына хас күренеш түгел, тик, үкенескә күрә, башҡа ҡайһы бер халыҡтар йоғонтоһонда ул хәҙер беҙҙә лә бик киң таралған. Кем белә, бәлки, халыҡты тап ошо юл менән юҡҡа сығарыу маҡсатында махсус эшләнгәндер ҙә был... Тарихтан белеүебеҙсә, ирекһеҙләп араҡы эсереп, көсләп суҡындырып, башҡорт халҡын шулай төрлө юлдар менән яулап алырға тырышҡандар. Эскелек бигерәк тә Бөйөк Ватан һуғышынан һуңғы йылдарҙа бөтә илдә таралып китә. Уның сәбәбе шунда: һуғыш ваҡытында атакаға күтәрелерҙән алда һалдаттарға йөҙәр грамм араҡы эсергәндәр ("Сталинский сто грамм" тип йөрөткәндәр). Беҙҙең башҡорт халҡы Бөйөк Еңеүҙе яулап алыуҙа бик әүҙем ҡатнашты һәм фиҙаҡәрлек өлгөһө күрһәтте. Шуны ғына әйтеп үтеү ҙә етә: беҙҙең үҙебеҙҙең 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы ойошторола. Ә бит 15 союздаш республика йәки 20-ләгән милли автономиялы республикаларҙың башҡа береһендә лә ундай дивизиялар ойошторолмаған. Бына ошо һуғыштан иҫән-һау ҡайтҡан яугирҙәрҙең күбеһе буйтым араҡы эсергә өйрәнеп алғайны инде. Ашарға ризыҡ наҡыҫ булыуға ҡарамаҫтан, улар араҡы эҙләп табып эсеүҙе хуп күрҙе, сөнки күпте күреп, күпте кисереп, йөрәктәре яраланып, һаулыҡтары бик ҡаҡшап ҡайтҡайнылар шул. Был ғәҙәт артабан башҡаларға, унан ҡала йәштәргә лә тиҙ үк "йоға " ла һалды. Шуны ла әйтеп үтеү кәрәктер, тимен: пионер һәм комсомол ойошмалары бар саҡта йәштәр араһында эскелек бик һирәк күренеш ине, әлбиттә. Был ойошмаларҙың тамырына балта сапҡас, үҫмерҙәр һәм йәштәр ни теләһәләр, шулай ҡыланалар, йәнәһе, хәҙер демократия. Тәмәке тартыу, араҡы эсеү, наркотиктар ҡулланыу фәҡәт мәктәп эскәмйәһенән башлана хәҙер, сөнки тәрбиә эше алып барылмай, тәртип боҙоуҙар фашланып, ғәйепләләргә тейешле яза бирелмәй, шунлыҡтан, балалар тулыһынса үҙ ихтыярына һәм урам йоғонтоһона торғоҙоп ҡалдырылған. Эскелектең тағы бер етди сәбәбе - эшһеҙлек. Был иһә бөгөн ғәҙәти күренешкә әйләнде, тип әйтергә лә була. Илдә социаль көсөргәнеш тыуҙырыусы был афәт арҡаһында күптәр араҡы эсеп, үҙенең ҡайғы-әрнеүҙәрен баҫырға тырыша.

Икенсе "ғәҙәти" күренеш: ғаиләләрҙең тарҡалыуы. Статистика шуны күрһәтә: өйләнеүселәрҙең 40-45 проценты айырылыша. Ғаилә тарҡалыуы тағы шул эскелеккә алып килә. Күпселек осраҡта ундай ғаиләләрҙә үҫкән балалар ҙа артабан шул юлға төшә. Әйткәндәй, хәҙер ҡыҙҙар егеттәргә ҡарағанда күберәк эсә һәм тәмәке тарта. Уның да үҙ сәбәптәре бар. Статистика буйынса 3-4 ҡатын-ҡыҙға бер генә ир-егет тура килә, шунлыҡтан ҡыҙҙар кейәүгә сығып, ғаилә ҡора алмай. Был ҡайғы ла йыш ҡына осраҡта эскелек менән "йыуыла".

Шулай итеп, эскелек сәбәптәре бик күп, улар бөтәһе лә йәмғиәтебеҙҙең тәрән сирле булыуы тураһында һөйләй. Ҡайһы берәүҙәр, эскелек - ул Аллаһы Тәғәлә алдында ҙур гонаһ тип раҫлай һәм кешеләргә дин йоғонтоһон көсәйтеү яғында. Был йәһәттән ҡарағанда, ислам дине генә эскелекте гонаһ тип киҫәтә һәм хурлай, тыя, ә башҡа диндәрҙә бындай ҡәтғилек юҡ. Киреһенсә, православныйҙарҙың ҡайһы бер байрамдары, шарап ҡулланылып үткәрелә. Шулай булғас, бер яҡтан ғына эскелекте тыйып йә хурлап, алкоголизмды бөтөрөү мөмкин түгел. Был күп төрлө һәм сетерекле проблеманы "эскелеккә ҡаршы көрәш" тип атау ҙа бигүк дөрөҫ түгел, миненсә. Беҙ "Айыҡ ауыл"дар тәжрибәһен өйрәнеп, уны ентекле анализларға тейешбеҙ. Эскеселәр менән көрәшеү - ул һәр саҡта ла беҙ теләгән һөҙөмтәне бирмәүе лә бик ихтимал бит әле. Беҙгә эсмәгән кешеләрҙе һаҡлап алып ҡалырға, уларҙы маҡтарға, шәхси тәртибен генә түгел, ә ғаиләһен, балаларын, туғандарын, дуҫиштәрен дә өлгө итеп күрһәтергә кәрәктер. Бәлки, ошондай ғаиләләрҙең ыңғай миҫалы эскән кешеләргә ыңғай йоғонто яһар һәм улар ҙа, сәмләнеп китеп, эскелекте ташлар ине.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ТӘҮБӘҺЕНӘ КИЛГӘН... ярлыҡаныр

**Ҡайһы бер әҙәмдәргә иблис һәм уның ҡуштандары өмөтһеҙлек күндерә. Уларҙы, тормошоңдо юҡ иттең, тәүбәгә килер хәлдән йыраҡлаштың, шуға күрә был донъяла ләззәт алып ҡал, тип алдай. Бер кешенең "Минең гонаһтарым шул тиклем күп, шуға ла Аллаһы Тәғәләнең уларҙы ярлыҡауына өмөтләнмәйем", тип әйтеүенә яуап был.**



Изге Ҡөрьән әҙәм балаһының был донъяла йәшәйеш асылын асып, Аллаһы Тәғәләгә инанғандарға һәм Раббыһы хаҡына изге эштәр эшләгәндәргә, кешеләргә файҙалы булғандарға ике донъя бәхетен вәғәҙә итеү менән бергә, Аллаһы Тәғәләне инҡар итеүселәрҙе ҡаты яза көтөүе хаҡында иҫкәртә. Дини китаптарҙа Раббылары күрһәткән билдәләргә һуҡыр ҡалыусылар, үҙҙәренең шәһүәттәре, теләктәре артынан йүгереүселәр, яһиллыҡта, тәкәбберлектә, гонаһ эшләүҙә Әбү Йәһил, Ҡарун, Фирғәүендәр артынан ҡыуыусылар фани донъяны ла, мәңгелек баҡыйлыҡты ла селпәрәмә килтереүселәр, тип бәйән ителә. Кем үҙен рухи яҡтан хайуан кимәленән дә түбәнерәк төшөрә, кем үҙен Аллаһы Тәғәләнән йыраҡлаштыра, кем үҙенән көсһөҙөрәктәргә ҡарата залимлыҡ күрһәтә, кем зинаны тормошоноң биҙәге итеп ала - ул үҙ гонаһтары өсөн язаны һис кисектермәй аласаҡ. Аллаһы Тәғәләнең ҡөҙрәте менән был донъяла уҡ уның тәкәбберлеге тар-мар ителәсәк, әммә ҡәлебенә пәрҙә ябылғандарҙан булһа, барыбер аңламаясаҡ. Ҡиәмәт көнөндә иһә, яңылыш йәшәгәнен күрәсәк, әммә һуң буласаҡ: ул золомо өсөн ғәҙел язаһын аласаҡ һәм мәңгелеккә йәһәннәмгә ырғыталасаҡ.

Тормош үҙгәртеп булмаҫлыҡмы? Һаҙлыҡтан ҡороға сығыр юлдар, упҡынға осҡанда тотонор терәк юҡмы әллә? Наҙанлыҡтан ҡылынған гонаһтар йәннәт ҡапҡаларының ҡабаттан асылмаҫлыҡ итеп ябылыуына килтергәнме? Тәүбә көнө үткәнме? Ғәжәйеп хәл, әммә Раббыбыҙ, ҡоло Үҙенә ҡарата күпме генә ғәҙелһеҙлек эшләмәһен, итәғәтһеҙлек күрһәтмәһен, тәүбә ҡапҡаларын япмай, үлем алҡымынан алғансы кешегә тәүбәгә килергә мөмкинлек бирә. "Кем тәүбә ҡыла һәм изге эштәр эшләй, ул ысынлап та, Аллаға хаҡ ҡайтыу менән ҡайта", тип әйтелә изге Ҡөрьәндә.

Һәр кемдең үҙ тормошон барлап, хаталарын танып, йәшәү рәүешен үҙгәртеп, киләсәккә йүнәлештәр эҙләгән, билдәләгән сағы була. Быға йә берәй төңөлдөргөс ваҡиға, йә уратып алған кешеләрҙең нәсихәттәре булышлыҡ итә. Йыш ҡына киләсәккә билдәләгән пландарында ул дингә ҡайтыу кеүек изге ғәмәлде лә аңынан үткәрә. Ихлас та күренә ниәттәре, күңел дә тарта, әммә шул мәлдәрҙә "ғибәҙәтханаға" килгәнсе бөтөрөргә кәрәкле эштәр килеп сыға. Йыш ҡына был бөтмәҫ эштәр уның ниәттәрен оноттора. Йыш ҡына тормош ҡыҙыҡтырғыстары уны изге маҡсаттарынан тағы ситкә алып китә. Йыш ҡына ул Раббыһына ҡарата ғәфләткә бирелә. Үҙгәреүгә, уйланыуға Аллаһы Тәғәләнең сираттағы мөмкинлек биреүен ҡулланыу зарур. Был күңел һикерткестәре гонаһтар саңынан таҙарыныуға аҙым эшләр этәргес булһа, яуап көттөрмәйәсәк. Бер хәҙистә Аллаһы Тәғәлә: "Миңә атлап килгәндәргә ҡаршы Мин йүгереп килермен", ти.

Күҙ йәштәре аша Аллаһы Тәғәләгә ялбарылған һәм изге ғәмәлдәр менән нығытылған ғәмәлдәр әҙәм балаһын таҙартмаҫмы? Башҡаса гонаһтарына әйләнеп ҡайтмаҫҡа биргән вәғәҙәһе һәм ошо вәғәҙәне үтәүе Уның ризалығын алыуға килтермәҫме? Был ҡатмарлы күңел торошон аңлау өсөн билдәле ислам ғалимы Фудейл ибн Ғиядтың ғибрәтле тарихын хәтергә төшөрөү кәрәктер. Ул һижри календарь буйынса II быуатта Аббасидтар хәлифәте осоронда йәшәгән. Мосолмандар араһында тәҡүәле бөйөк ғалим булып танылғансыға ҡәҙәр ул бурлыҡ, талау менән шөғөлләнгән. Фудейл төрлө ҡалалар араһында сауҙа эше алып барған карауандарға һөжүм иткән, уларҙың мөлкәтен үҙләштергән, гонаһлы тормош алып барған. Бар теләге үҙенең ҡомһоҙлоғон, нәфсеһен туйындырыуға йүнәлтелгән булған. Бар яҡын-тирә уның исемен ишетеүҙән ҡалтыранып торған. Уға ҡарап "Бындайҙарҙы ҡәбер генә төҙәтә", тип әйтерҙәр ине бөгөнгө көндә. Әммә Аллаһы Тәғәлә Үҙенең бөйөклөгөн ошо бәндәһе аша тағы ла бер күрһәтә. "Сереп" боҙолған кешенең ҡырҡа үҙгәреүенә бер генә Ҡөрьән аяты булышлыҡ итә. Төндәрҙең береһендә Фудейл йәшенеп кенә һөйгән йәре янына барырға сыға. Шул мәлдә ул **"Аллаһты иҫкә алғанда иманлы кешеләрҙең йөрәге тулҡынланыр мәл етмәнеме ни?"** тигән аят ишетә. Был аят уның бар күҙәнәктәрен ярып инә. Ул "Йә, Раббым, ваҡыт етте!" тип ҡысҡырып ебәрә. Бынан һуң уйҙарына сумып, бер кем дә йәшәмәгән иҫке, емерек кенә йортҡа йүнәлә. Унда йоҡларға ниәт итә . Көтмәгәндә йорт эсендә кешеләр тауышын ишетә. "Әйҙәгеҙ, юлды дауам итәйек", ти уларҙың береһе. "Әгәр юлды дауам итһәк, Фудейл беҙгә һөжүм итәсәсәк", тип ҡырт киҫә икенсеһе. Фудейлға бысаҡ ҡаҙалғандай була. "Кешеләрҙе емерек йорттарҙа йәшенергә мәжбүр итерлек ҡурҡыныс әҙәмме мин?"- ти ул. "Йә, Раббым, тәүбәгә киләм һәм минең тәүбәмдең дәлиле итеп Ҡәәбә янында булыуымды ҡабул ит", тип ялбара. Фудейлдың тәүбәһе шул тиклем ихлас була, бар тормошоноң ҡырҡа үҙгәреүенә килтерә. Уның аҡыллы кәңәштәре, тормош ҡағиҙәләре билдәле ислам ғалимдарының, әүлиәләрҙең зирәк кәлимәләре янында йәнәш тора. Уның исеме ислам диненең рухи мираҫында ныҡлы урын алған, бөгөн дө уны бөйөк ислам зыялыһы, зирәк вәғәзсе, абруйлы ғалим итеп танымйҙар. Нәсихәттәре ҡәлептәрҙе дауалай.

"Бер үк гонаһты ике тапҡыр ҡабатлаған кеше - иң ғәфил, иң алдаҡсы кеше ул", тигән был бөйөк шәхес. Был һүҙҙәре менән ул Аллаһы Тәғәләнән ҡурҡыуы хаҡында телмәр тотоп, кешеләр араһында үҙенең тәҡүәлелеген күрһәтергә тырышҡан, әммә гонаһ эшләүҙән ситләшә алмаған кеше - иң ғәфиле, тигәнде күҙҙә тотҡан. Бындай кеше аҙым һайын үҙенең Мөхәммәт бәйғәмбәр өммәтенән булыуын тылҡый, ләкин Бәйғәмбәр мираҫына бер аҙымға булһа ла яҡынаймай. Бындай кеше буш, үҙ ҡараштарында етди түгел. Үкенескә күрә, тәүбәгә килеүен күрһәтергә тырышыуы - уның сиге булмаған гонаһтар теҙмәһендә сираттағы ялы ғына. Бер аҙҙан тәүбәһен онотоп, ҡабаттан ҡырын эштәренә тотонасаҡ ул.

Иң мөһиме - тәүбә ҡапҡаһына килеп, Аллаһы Тәғәләнән ихлас үҙгәреүҙе, үҙгәреү өсөн уның шәфәғәтенә өлгәштереүен һорау. Тәүбә ҡапҡалары Ҡиәмәт көнөнә һәм йән тәндән айырылғанса асыҡ. "Йә, Раббым, мин һиңә йүнәлдем" тип, әҙәм балаһы Раббыһына йөҙөн борһа, Аллаһы Тәғәлә "Йә, ҡолом, мин һинең ҡаршыңда", тип яуаплай. Кем Аллаһы Тәғәләгә йүнәлә, Ул ҡолона ҡаршы сыға, кем Раббыбыҙҙан ситкә борола, Ул барыбер үҙе янына өндәй. "Эй, ҡолом, ихласлап доға уҡыған һәм ғәфү үтенгән һайын Мин һине бер нәмәгә ҡарамайынса ғәфү итәсәкмен. Эй, әҙәм балаһы, гонаһтарың күккә тиклем күтәрелгәндә лә, тәүбәгә килһәң, мин һине барыбер ғәфү итәсәкмен", ти.

Өмөтһөҙлөк, ғәфләт, вайымһыҙлыҡ инсан дәрәжәһен төшөрә, тәкәбберлек уны тереләй юҡ итә. Тәүбә - уның Раббыһы алдында тоғролоғон күрһәтә. Эйе, тәүбә ишектәре үлем килгәнсе, Ҡиәмәт көнөнә ҡәҙәр асыҡ, әммә уларҙың ҡасан килерен беҙ белмәйбеҙ. Шуға күрә лә, тәүбәләребеҙҙә тотҡарлыҡ килешмәй. Гонаһтар Ҡөҙрәтле Аллаһ тарафынан ғына ғәфү ителә ала.

**Арыҫлан ИСКӘНДӘРОВ.**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

### Ун туғыҙынсы көн

**1-се бүлек: аҡыл. Ижади һәләттәрҙе үҫтереү**

Үҙеңдә ижади һәләттәр "мускулдарын" үҫтереү ғәйәт мөһим. Ул үҫешкән хәлдә һеҙ теләгән идеяларҙы бойомға ашыра аласаҡһығыҙ, ә был һеҙҙең шәхси камиллашыуығыҙҙа һәм матур тормошҡа юлығыҙҙа ярҙам итәсәк. Ижад тормошоғоҙҙо шулай уҡ ҡыҙыҡлы, шатлыҡлы һәм лайыҡлы итәсәк.

Сираттағы был күнекмәне башҡарыу өсөн тәүҙә үҙегеҙҙе көсөргәнештән бушатығыҙ. Яңы ысул күҙҙәрҙе йомоп, класс таҡтаһын күҙ алдына килтереүҙән башлана. Бына унда яйлап һүҙҙәр пәйҙә була башлай. Яҡынраҡ килеп, һеҙ унда үҙегеҙҙең исемде уҡыйһығыҙ. Уның янында таҡтаның бөтөн майҙанын тултырып "Көсөргәнештән арын" тигән һүҙ яҙылған. Таҡтаны һәм унда яҙылған һүҙҙәрҙе ныҡ итеп иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

Хәҙер, күҙегеҙҙе йомоп, үҙегеҙҙең 6 йәшлек сағығыҙҙы күҙ алдына килтерегеҙ. Ул саҡта һеҙ нимә яраттығыҙ һәм ваҡытығыҙҙы нисек үткәрә торғайнығыҙ? Шул саҡтағы әле үҙегеҙҙә йоҡомһораған бәхетле, ижади әүҙем һәм теремек баланы күҙ алдына килтерегеҙ. Өлкәндәргә ул саҡ нисек ҡарай инегеҙ? Ниндәй шаянлыҡтар ҡыла инегеҙ? Шуларҙы уйлап, үҙегеҙҙе күңелләндереп ебәрегеҙ. Көндөң ҡалған өлөшөндә бөтә нәмәгә балаларса ҡарағыҙ. Бер ҡасан да эшләмәгән берәй аҙым яһағыҙ, мәҫәлән, роликлы конькиҙа шыуырға сығығыҙ йәки картиналар галереяһына барығыҙ. Ни ҡыланһағыҙ ҙа уны күңелле һәм ҡыҙыҡлы итергә тырышығыҙ. Һеҙ бит хәҙер бер ҡасан да элекке кеүек булмаясаҡһығыҙ!

**2-се бүлек: тән. Күберәк күнекмәләр**

Һеҙҙең инде ярайһы яйға һалынған физик күнекмәләрегеҙ даими көн тәртибегеҙҙең мөһим өлөшөн тәшкил итергә тейеш. Ауыр булмаған был күнекмәләрҙең ниндәй етди һөҙөмтәләр биреүен һеҙ күрергә һәм тойорға тейешһегеҙ. Ошо физик күнекмәләрҙең биш өҫтөнлөгөн көндәлегегеҙгә теркәп ҡуйығыҙ. Унан журнал йә гәзиттән үҙегеҙ оҡшарға теләгән берәй атлеттың фоторәсемен табып, киҫеп алығыҙ ҙа ванна бүлмәгеҙҙең көҙгөһө эргәһенә, ә иң яҡшыһы - һыуытҡысығыҙ ишегенә йәбештереп ҡуйығыҙ. Гел генә шуға ҡарап, үҙегеҙҙә лә шундай уҡ формалар үҫешеүенә бөтә көсөгөҙҙө туплағыҙ.

**3-сө бүлек: характер. Лидер булырға!**

Үҙегеҙҙә иң мөһим ун лидерлыҡ сифаттары булдыра башлағыҙ:

а) үҙ хыялығыҙға ышаныс;
б) ҡаһарманлыҡ һәм ныҡышмаллыҡ;
в) энтузиазм;
г) башҡаларға ихтирам;
д) үҙ-үҙеңде контролләү һәм камиллыҡҡа ынтылыу;
е) яҡшы үҫешкән йәмәғәт күнекмәләре һәм әҙәплелек;
ж) көтөлгәндән күберәккә өлгәшеү;
з) тормошоңдо планлаштыра һәм ойоштора белеү;
т) тәүәккәл ҡарарҙар ҡабул иткәндә иҫәпселлек;
к) уңышҡа өлгәшеүгә ышаныс һәм көслө ынтылыш.

**Робин ШАРМА.**



## 18 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.05 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом".
14.00 "Другие новости".
14.25 "Понять. Простить" (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Самый лучший муж" (16+).
16.10 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Шулер". Криминальная драма (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 Ночные новости.
00.15 "Познер" (16+).
01.15, 03.05 "Омен". Фильм ужасов (18+).
03.00 Новости.
03.20 "Замороженная планета" (12+).
04.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "1000 мелочей".
09.45 "О самом главном".
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+).
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+).
